ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кiске Өфө

26-1 август - сентябрь (урағай - һарысай) 2023

№33 (1075)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

## Башҡорт телен өйрән!



4

## Ҡайһы тарафта йәшәһә лә…

Башҡортостан илһөйәре булһын йәштәребеҙ



8

## Яҡындарыңдың тормошон…

үпкәләүҙәрең менән ағыулама



10

## Ир-егет ҡеүәте…

илде ҡурсалай



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Иғтибар! 1 сентябрҙән 2024 йылдың беренсе яртыһы өсөн газит-журналдарға яҙылыу кампанияһы старт ала. Аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы ошо осор өсөн дә "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзитенә 857 һум 04 тингә яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе еткерәбеҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Балаларҙы хеҙмәт тә тәрбиәләй, ләкин һуңғы йылдарҙа уларҙы ҡайһы бер мәктәп эштәренә йәлеп итеү ата-әсәләр тарафынан хупланмай, хатта тыйыла килде. Был дөрөҫмө?

***Шайморат ТИМЕРБУЛАТОВ, М.Ғ. Рәхимов исемендәге 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры:*** Һүҙ ҙә юҡ, мәктәптәрҙә хеҙмәт тәрбиәһе бик кәрәк, был йәш быуынды оло тормошҡа әҙерләүҙә ифрат мөһим урын алып тора. Хеҙмәт һөйөп, өлкәндәргә ярҙам итеп үҫкән, бер ниндәй эштән дә ҡурҡып тормаған бала физик яҡтан да көслө була, үҙен дә ышаныслы тота. Үҙемдең эш тәжрибәһенән сығып әйткәндә, бөгөн күпселек ата-әсә уҡыусыларҙың мәктәптә һәр төрлө эштәргә йәлеп ителеүенә һис тә ҡаршы түгел, сөнки балалар хәҙерге заман шарттарында былай ҙа күп ваҡыттарын телефондан айырыла алмай йә компьютер уйындары артында ултырып үткәрә. Дөрөҫ, үҙегеҙ әйтмешләй, балаларын мәктәп эштәренә йәлеп итеүҙе тыйып килеүсе бәғзе бер ата-әсәләр ҙә бар, ҡыҙғаныска. Был, ғәҙәттә, бер бөртөк бала тәрбиәләүсе йәки уларҙы артыҡ иркәләтеп, бәпләп үҫтереүсе ғаиләләрҙә осрай. Был дөрөҫ түгел, әлбиттә, сөнки шул арҡала бала күрәләтә ҡыйыуһыҙ, булдыҡһыҙ, хатта ялҡау булып үҫеүе лә ихтимал бит. Ә инде класташтары менән берҙәм эш башҡарып, балалар тағы ла яҡынданыраҡ аралаша, нығыраҡ дуҫлаша, бер-береһен күберәк белә ала. Уларҙа яуаплылыҡ, берҙәмлек, эшһөйәрлек, ныҡышмалылыҡ, маҡсатҡа ирешеү кеүек сифаттар тәрбиәләнә. Ҡайһы бер балаларҙың хатта тап ошо берҙәмлектә беренселек, сәм һәм лидерлыҡ сифаттары асыла.

Беҙҙең гимназия-интернатта балалар йыл әйләнәһенә үҙҙәренә тейешле һәм көстәренән килгән барлыҡ эштәрҙе лә башҡара: ҡыш ҡар көрәйҙәр, яҙ ағас ултырталар, экологик өмәләрҙә ҡатнашалар, ятаҡ бүлмәләрен таҙарталар, ветерандарға барып, уларға йорт-хужалыҡ эштәрендә ярҙам итәләр, сәскә түтәлдәре ултырталар. Йәй буйы һәр бер класс бер аҙна хеҙмәт лагерында эш башҡара. Был турала ата-әсәләр белеп тора, сөнки уларҙың йыйылышында был хаҡта хәбәр итеп, иҫкәртеп ҡуябыҙ. Бәхеткә, хеҙмәт тәрбиәһенә ҡаршы сығып, һүҙ күтәреүсе бер кем дә юҡ беҙҙә. Һуң, шулай булмайса! Гимназиябыҙ ҙа бит республикабыҙҙың тәүге президенты, ал-ял белмәйенсә ике тиҫтә йыллап халҡыбыҙға хеҙмәт итеүсе Мортаза Рәхимовтың исемен йөрөтә. Бала сағы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарына тура килеүе, атаһы фронтҡа киткәс, донъя йөгөн әсәһе менән бергәләп тартыуы; ауыр йылдар булыуға ҡарамаҫтан, белемгә ынтылып, эшһөйәр булып үҫеүе, артабанғы тормош һәм хеҙмәт юлы - ябай оператор ҙан алып завод директоры, унан яңы республикабыҙҙың Президенты вазифаһына тиклем күтәрелеүен балалар Мортаза Ғөбәйҙулла улының тырышлығы, нимәгә тотонһа ла, булдырыуы, эш һөйөүсәнлеге арҡаһында өлгәшеүен яҡшы белә. Ул бит көн-төн юлда, республикабыҙ районлары хужалыҡтарында булып, халыҡ менән аралашты, уларҙың тормош шарттарын яҡшыртыуға күп хеҙмәт көсө түкте. Уҡыусыларҙы беҙ тап уның хеҙмәт өлгөһөндә тәрбиәләргә ынтылабыҙ, сөнки илгә бөгөн күпләп техник һөнәр эйәләре, етештереү цехтары мастерҙары, инженерҙар, технологтар, конструкторҙар, IT белгестәр талап ителә.

Эшләп үҫкән хур булмаҫ. Уҡыусыларҙың эшләгәне мәктәп өсөн булһа, өйрәнгәне үҙҙәре, уларҙың киләсәге өсөн кәрәк бит, сөнки, Дәүләт Думаһы депутаттарының мәктәптә хеҙмәт тәрбиәһе биреүҙе тергеҙеү тураһындағы закон проектында килтерелгән бөйөк педагог Ушинскийҙың һүҙҙәре менән әйткәндә, әгәр тәрбиә эше кешегә бәхет теләй икән, ул уны "тормош хеҙмәтен"нә әҙерләргә тейеш. Раҫ һүҙҙәр, был бөгөн икеләтә мөһим.

АФАРИН!

# УРАЛ БАТЫР РУХЫ...

## тау булып күтәрелде, ҡая булып ҡалҡты

**Үткән аҙнала Урал батырҙың эҙҙәре, Шүлгәндең аһтары ҡалған хозур төбәктә - "Шүлгәнташ" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығында "Урал батыр" эпосын башҡарыусыларҙың төбәк-ара конкурсын йомғаҡлау тантанаһы үтте.**

Сирек быуатлыҡ тарихында (Бөрйән районына иһә унан да күп - 27-се тапҡыр үтә) конкурста 5 меңгә яҡын уҡыусы сәсәнлектә һынау тотҡан. Ошо мәртәбәле конкурс ярҙамында иңдәренә илһам ҡанаттары ҡуйғандар, йөрәктәрендәге рух осҡонон ялҡын итеп дөрләткәндәр бөгөн республикабыҙҙың төрлө юғары уҡыу йорттарында уҡый, телебеҙ, рухыбыҙ һағында уяу тороп, төрлө тармаҡтарҙа эшләп йөрөй. Әлеге тантанала ла кемдер бәрәү билдәләп үтеүенсә, "йәштәр, балаларҙың һуңғы 25 йылдағы быуыны, беҙҙең быуындағылар кеүек, "Урал батыр" эпосын әкиәт итеп түгел, ә халҡыбыҙҙың тәүтарихы итеп уҡыны, йәшәйеш коды итеп аңдарына һеңдерҙе. Шуға ла бөгөнгө йәштәр икенсерәк, аңлыраҡ, улар өҙөлә яҙған быуындар бәйләнешен тергеҙеүселәр..."

(Дауамы 16-сы биттә).




(Уртала - тәп еңеүсе Рәзилә Шахморатова).

12+

**✓ Ысын хеҙмәт тәрбиәһе - киләсәккә һөнәри йүнәлеш алырға тейеш бөгөн уҡыусы балалар мәктәптә. Ә быны өсөн тейешле шарттар булырға тейеш. Шулай уҡ махсус әҙерлекле, компетентлы хеҙмәт уҡытыусылары кәрәк.**



ҮӘТ , ШУЛАЙ!

# КӨСӨ ЕТЕРЛЕК КЕНӘ...



**Биштәрҙең ауырлығы 1-2-се класс уҡыусылары өсөн 1,5 килограмдан, ә 3-4-се класс өсөн 2 килограмдан артмаҫҡа тейеш.**

Рюкзактың арҡаһы ҡаты, ныҡ, ә ул үҙе һыуҙы кире ҡағыусы туҡыманан, киң ләмкәле, мотлаҡ яҡтылыҡты кире ҡайтарыусы билдәләр менән тегелгән булырға тейеш. Был хаҡта Роспотребнадзорҙың республика буйынса идаралығының тышҡы коммуникациялар бүлеге начальнигы Регина Аҡмалова белдереүенсә, мәктәп формаһының яртыһы тәбиғи туҡымаларҙан торорға, һауа үткәреүсе һәм дымды этәреүсе туҡыманан булырға тейеш. Аяҡ кейеме класс һәм спорт дәрестәре өсөн айырым. "Алмаш аяҡ кейеме"н тәбиғи күндән, нубуктан йәки тығыҙ туҡыманан, бәләкәй үксәленән һатып алыу яҡшы. Һатыусы ошондай сифаттарға тап килеү тураһында бөтә документтарҙы беренсе талап буйынса бирергә тейеш. "Мәктәп формаһын, аяҡ кейемен, рюкзакты һатып алынғандан алып 14 көн эсендә алмаштырырға һәм кире ҡайтарырға була икәнен хәтерегеҙҙә тотоғоҙ", - тип хәбәр иткән ведомство вәкиле.

# ЯҢЫСА ТУҠЛАНАЛАР



**Яңы уҡыу йылынан Башҡортостан мәктәптәрендә балаларға яңыртылған туҡланыу тәртибе тәҡдим ителәсәк.**

БР сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Алексей Гусев "Башинформ"ға хәбәр итеүенсә, республикала менюларҙың ике төрө әҙерләнгән - база һәм Онищенко менән Тутельяндың рецептар йыйынтығы буйынса меню. Улар санитария ҡағиҙәләренә, шулай уҡ диетология һәм нутрицология талаптарына яуап бирә. Шул уҡ ваҡытта улар балалар өсөн ҡыҙыҡлы буласаҡ. Мәҫәлән, иртәнге ашҡа уҡыусыларға "Наполи" фрикаделькаһы, "Де-воляй" ҡош ите киҫәктәре, эремсектән бешерелгән суфле, алманан чипсы һәм томат соусы менән митболдар тәҡдим ителәсәк. Төшкө аш ваҡытында уҡыусылар наггетстар, "Саланики" һурпаһы, татар азуһы, ауылса картуф, чиполлетти, харчо һурпаһы, балыҡ шарҙары һәм ризотто тәмләп ҡарай аласаҡ. Республика Башлығы Башҡортостандың сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығына мәктәп туҡланыуын контролгә алырға ҡушҡайны. Мәктәптәрҙә һалҡын аш һәм ҡулланыу ваҡыты үткән аҙыҡ-түлек тәҡдим ителмәһен өсөн бөтә уҡыу йорттарын 1 сентябрь алдынан тикшерергә кәңәш бирҙе.

БЫЛ АЙҘА...

# ҺАРЫСАЙҘАН - УҠЫУ ЯҢЫСА

**Алтынға мансылған, уңышҡа бай, йомарт миҙгел етте - һарысай. 1699 йылға тиклем Русь дәүләтендә яңы йыл тап 1 сентябрҙән башлана торған булған. Был, күрәһең, көҙгө мәлдең тәбиғәтенә бәйле булғандыр: алда ниндәйҙер мөһим үҙгәрештәр көтә кеүек; әйтерһең дә, тормоштоң яңы осоро башлана: йәм-йәшел донъя, тәбиғәт күҙ алдында үҙгәрә, алтынлана, урыны менән йәйғор төҫтәренә инеп, күҙҙең яуын ала.**

Ысынында, бөгөн дә бит 1 сентябрь яңы йылдың тәүге көнө булып ҡала - яңы уҡыу йылының тәүге айы башлана!

Тимәк, өр-яңы биштәрҙәренә өр-яңы дәреслектәр, әлегә яҙыла башланмаған ап-аҡ битле дәфтәрҙәрен тултырып, 1-се класҡа - белем иленә юл башлаусы бәләкәй ҡыҙҙар һәм малайҙар өсөн уларҙың тормоштарында бөтөнләй яңы донъя асыласаҡ. Иң мөһиме, тәүләп мәктәп тупһаһына баҫыусы кескәйҙәрҙең ошо донъяға баҡҡан осҡонло ҡараштары һүнмәһен-һүрелмәһен ине, юғиһә, бөгөнгө уҡыусыларҙың гаджеттан башҡа бөтөн нәмәгә битараф ҡиәфәттәренән һалҡынлыҡ бәрә, мәңгелек ҡиммәттәребеҙҙән ятһыныу билдәләре йышыраҡ сағылғандай.

Бөгөн илдәге яңы сәйәси-иҡтисади-социаль шарттарҙа иһә быйылғы уҡыу йылын ҙур һәм етди үҙгәрештәр көтә. Дөрөҫөн әйткәндә, 1 сентябрҙән Рәсәй мәктәптәре һуңғы йылдарҙа юғалта башлаған белем биреү-тәрбиә йүнәлештәренә кире ҡайтасаҡ. Ләкин был бәғзе бер "үтә аҡыллылар" ҡабул итеп бөтмәгән "совет" системаһын хәтерләтһә лә, уның

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Балаларҙы хеҙмәт тә тәрбиәләй, ләкин һуңғы йылдарҙа уларҙы ҡайһы бер мәктәп эштәренә йәлеп итеү ата-әсәләр тарафынан хупланмай, хатта тыйыла килде. Был дөрөҫмө?***

***Әлмира ФӘЙЗУЛЛИНА, М.Аҡмулла исемендәге БДПУ магистранты:*** Мәктәптә хеҙмәт тәрбиәһе темаһы минең диплом алды эшем булды. Был теманы артабан диплом эшендә лә дауам итергә теләк бар, сөнки мәктәптәрҙә хеҙмәт тәрбиәһенә еңелсә, хатта илке-һалҡы ҡарашты беҙ, балалар, үҙебеҙ күрә йөрөнөк. Эш ниҙә һуң? Дөрөҫөн генә әйткәндә, мине иң тәүҙә хеҙмәт дәресенең ҡыҙҙар һәм малайҙар шөғөлөнә бүленеше бик оҡшап етмәй ине. Ниңә ҡыҙҙар был дәрестә йыл буйына мотлаҡ торт йә бәлеш бешерһә, малайҙар иһә сыйырсыҡ ояһы яһай? Мин уҡыған мәктәптә хатта тегеү, бәйләү кеүек ҡул эштәренә лә өйрәтелмәне, сөнки иҫкереп бөткән бер-ике теген машинаһы даими эшләмәй, бешереү өсөн плитә менән электр мейесе лә ватыҡ һәм уҡытыусы янғын сығып китеүҙән ҡурҡып, уны ҡулланмай. Һөҙөмтәлә беҙ "һалҡын ҡабымлыҡ" - һәр төрлө бутербродтар ғына яһарға өйрәнә инек. Йыш ҡына хеҙмәт дәрестәрендә ҡыҙҙарға иҙән йыуыу, ә малайҙарға ҡар көрәү кеүек йыйыштырыусы менән урам һепереүсе эше йөкмәтелә ине. Өҫтәүенә, ҡайҙалыр ниндәйҙер мебель күсереү, ултырғыс, парталар ташыу, китапхананан макулатура сығарыу ҙа беҙҙең хеҙмәт дәресе сәғәттәрен ала торғайны. Бындай эштәрҙән һуң, тәбиғи, дәрескә кейеп килгән кейемдәр бысрана, бөтәрләнә һәм өйҙә күптәребеҙгә әләгә лә ине.

Быларҙан тыш, класс бүлмәһен йыуыу ҙа нишләптер ҡыҙҙар эше тип ҡаралды. Хәтерләйем, шундай дежурлыҡ иткән ваҡытта 7-се синыфтағы бер ҡыҙыҡай ауыр ултырғыстарҙы күтәреп, партаға түңкәреп йөрөгәндә, эсен ауырттырып, дауаханаға әләккәйне. Баҡтиһәң, уға ике-өс ай элек кенә һуҡыр эсәккә операция яһаған булғандар икән. Дежурлыҡ итмәҫкә тигән ҡағыҙы булһа ла, бергә уҡыған ҡыҙҙарҙың ризаһыҙлығынан ҡурҡып, ул өндәшмәгән. Шул хәлдән һуң ата-әсәләр үҙҙәренең йыйылышында балаларҙы мәктәп эшенә ҡушмаҫҡа тигән ҡарар сығарғайны. Бер ни тиклем ваҡыт буйы йыйыштырыусы класс бүлмәләрен онотҡанда бер генә һөртөштөрөп ала башланы. Яҙғы-көҙгө мәлдәрҙә класс бүлмәләре бысраҡ һәм саңға күмелә ине. Бындай хәлдә "яза" ата-әсәләргә түгел, ә беҙҙең өҫкә ябырылды: уҡытыусылар, "йәп-йәш ҡыҙ һәм егеттәр, ҡулһыҙҙар кеүек, бысраҡҡа батып ултыраһығыҙ" тип беҙҙе битәрләй, оялта башланы. Шунан һуң мәктәп һәм класс бүлмәләрендә яңынан дежурлыҡ итеү тәртибе әйләнеп ҡайтты. Ә инде дөйөм мәктәп дежурлығын беҙ ишек төбөндә вахтер, йәғни бөгөнгөсә әйткәндә, һаҡ хеҙмәте урынында үтә инек. Ишек төбөндә секунд һайын тышҡы ишек асылып-ябыла, ҡыш борҡоп ҡар һыуығы тула. Һыуыҡ тейеп, сирләп китеүселәр ҙә йыш булды. Бөгөн ошо хаҡта уйлап ҡараһаң, сәстәр үрә тора: ниндәй хәүеф аҫтында ултырған был дежур балалар! Ярай эле, ул саҡ мәктәпкә бәреп инеүсе ҡоралды террористар булманы...

Быны менән ни әйтергә теләйем: мәктәптәрҙә хеҙмәт тәрбиәһе - ул иҙән йыуыу менән ҡар көрәүгә генә ҡайтарып ҡалдырылырға тейеш түгел. Быны өсөн урам һепереүсе, йыйыштырыусылар штаты бүленергә тейеш һәр мәктәпкә. Балалар иҫәбенә мәктәп йыйыштыртыу, миңенсә, дөрөҫ түгел. Бындай күнекмәләрҙе улар өйҙәрендә лә ала. Өмәләр, генераль таҙартыуҙар кеүек "файҙалы-йәмғиәт" эштәрендә ҡатнашһын әйҙә улар. Ысын хеҙмәт тәрбиәһе - киләсәккә һөнәри йүнәлеш алырға тейеш бөгөн уҡыусы балалар мәктәптә. Ә быны өсөн тейешле шарттар (махсус йыһазландырылған хеҙмәт кабинеттары, ҡорамалдар, станоктар, башҡа кәрәк-яраҡ материалдар) булырға тейеш. Шулай уҡ махсус әҙерлекле, компетентлы хеҙмәт уҡытыусылары кәрәк. Ул, мәҫәлән, әйҙә өйрәтһен, ти, баяғы сыйырсыҡ ояһы яһарға ла, торт бешерергә лә, ләкин шулар иҫәбендә хеҙмәт уҡытыусыһы ниндәйҙер станоктарҙа эшләргә лә, ватылған ултырғыс йә "сәпитен" йүнәтергә лә, "электр техникаһы әлифбаһы"н өйрәнергә лә ярҙам итһен балаларға. Юғиһә бит, бөгөнгө үҫмерҙәр һәм егеттәр араһында ла хатта ябай электр схемаһын йыя белеүсе лә һирәк.

Бөгөн, әйткәндәй, Дәүләт Думаһының бер төркөм депутаттары урта белем биреү программаһына "хеҙмәт" һәм "ижтимағи-файҙалы" эшмәкәрлек төрҙәрен ҡайтарыу тәҡдиме менән сығыш яһай. Мәскәү мәктәптәренең берендә оҙаҡ йылдар хеҙмәт дәресенән уҡытҡан педагог-технолог Анастасия Кругликова әйтеүенсә, түбән рейтинглы мәктәптәр, әлегесә, бешеренергә һәм сыйырсыҡ ояһы эшләргә өйрәтеү менән сикләнә, ә көслө мәктәптәрҙә хеҙмәт дәрестәрендә лә хатта информатика серҙәрен өҫтәмә өйрәнеү дауам итә; дизайн күнекмәләре: түтәлдәр эшләү, өй алды йәки дача биләмәһен проектлау, ҡыуаҡтар, төрлө сәскә сорттары сығарыу, йәшелсә-емеш үҫтереү "әлифбаһы"н - киләсәк тормошта кәрәк һөнәр төрҙәрен үҙләштерәләр. Ошо йәһәттән мине лә, нишләп әле мәктәптәрҙә башҡорт кейемдәре тегергә, селтәр эшләргә, уҡ-һаҙаҡ яһарға өйрәтмәйҙәр икән, тигән һорау күптән борсой...

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Бөрйән районында 22 августан 25 августҡа тиклем "Йәштәр йыйыны - 2023" Волга буйы федераль округы йәштәре форумы үтте. Унда Волга буйы федераль округынан, шулай уҡ Мәскәүҙән, Санкт-Петербургтан, Свердловск, Силәбе һәм Ҡурған өлкәләренән йәштәр ҡатнашты. Улар өсөн бер нисә йүнәлеш буйынса мәғариф-мәҙәни программа әҙерләнгән. Атап әйткәндә, ҡыҙҙар-егеттәр мәктәп һәм студенттар үҙидаралығы, медиатрендтар, социаль селтәрҙә эшләү, ауыл ерендә йәшәүҙе һәм эшләүҙе популярлаштырыу, "Атайсал" йәш яҡташтар берләшмәһен һәм йәштәр сәйәсәтен үҫтереү хаҡында һөйләште.

✓"Йәштәр йыйыны - 2023" Волга буйы федераль округы йәштәре форумы майҙансығына Башҡортостан башлығы Радий Хәбиров килде. "Ысын күңелдән әйтәм! Һеҙ - донъялағы иң яҡшы йәштәр. Һеҙ иң аҡыллылары, иң яҡшылары, иң дөрөҫтәре. Бәлки, ҡайһылыр осраҡта дөрөҫ тә түгелһегеҙҙер, әммә һеҙ бынан тик яҡшыраһығыҙ ғына. Һеҙ - дәүләт, беҙҙең тыуған Башҡортостаныбыҙҙың терәге. Һеҙ беҙҙең ҡулдан байраҡты алып, республиканы һәм илде тик алға алып барырһығыҙ тип ышанабыҙ", - тине Башҡортостан Башлығы үҙенең сығышында.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфө районында карантин индереү хаҡындағы указға ҡул ҡуйҙы. Унда яҙылыуынса, Авдон ауылындағы "Башҡортостан" ҡошсолоҡ фабрикаһында юғары патогенлы ҡош киҙеүе сығанағы теркәлгән. Хәүефле зонала - Авдон, Жуков, Сергеевка һәм Уптин ауылдары, "Гарнизонный", "Дубрава", "Отдых", "Солнечный-3", "Рябинушка" һәм "Эталон" баҡсасылыҡ ширҡәттәре. 10 саҡрым радиустағы тораҡ пункттар күҙәтеү зонаһы булараҡ билдәләнгән.

✓Авдондағы ҡош киҙеүе менән зарарланған тауыҡтарҙы юҡ итеүгә өҫтәмә көстәр йәлеп ителгән. Әлеге ваҡытта урында 500 кеше эшләй, уларҙың 200-ө - дәүләт ветеринария хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре. Белгестәр вирус сығанағын тиҙ арала бөтөрөү өсөн бөтә кәрәкле техника һәм ҡорамалдар менән файҙалана. Яндырыу процедураһын аҙна аҙағына тиклем тамамларға ниәтләйҙәр, тип хәбәр итәләр Башҡортостандың ветеринария буйынса дәүләт комитетынан. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 9 августан ҡошсолоҡ фабрикаһында ҡоштарҙың ҡош киҙеүе билдәләре менән сирләүе, күпләп ҡырылыуы теркәлгән.

✓ ***Балалар үҙҙәре бысратҡанды үҙҙәре таҙартып, үҙҙәре йыйыштырырға, йәғни үҙ ҡылыҡтары өсөн яуаплылыҡ тойорға ла өйрәнә. Өҫтәүенә, улар мәктәптең иҙән йыуыусылары хеҙмәтен баһаларға өйрәнә.***





күсермәһе түгел икәнен аңлау кәрәк. Яңы шарттарға яраҡлаштырылған, байытылған һәм, әлбиттә, үткән тәжрибәнең дә иң яҡшы традициялары (ә бәлки, һабаҡтары?) иҫәпкә алынған, һаҡланып ҡалған булырға тейештер бөгөнгө мәғариф өлкәһендә.

Дәүләт Думаһы һәм РФ Мәғариф министрлығында белдереүҙәренсә, киләсәктә белем биреүҙә ошоға тиклем йәшәп килгән вариативлыҡ (төрлө кимәллек) бөтөрөлөп, мәктәптәр барыһы ла берҙәм программаға күсәсәк, йәғни бөтә балаларға ла бер төрлө белем нигеҙҙәре биреләсәк, сөнки, ҡайһы берәүҙәр фекеренсә, вариативлыҡ балаларҙың хоҡуҡтарын боҙа, имеш. Бында бәхәсләшергә урын бар, сөнки берҙәм программа һәләтле балалар хоҡуғын боҙмай, тип кем әйтә ала? Ә шулай ҙа физика, математика, химия һәм башҡа фәндәргә берҙәм программа талаптары ҡағылмай; берҙәм нигеҙ программа башланғыс кластарҙа - рус теле, уҡыу дәресе, тәбиғәтте өйрәнеүгә, ә өлкән кластарҙа тарих, география, йәмғиәтте өйрәнеү дәрестәренә генә ҡағыла. Закон шулай уҡ мәктәптәргә ниндәйҙер сиктәрҙә үҙ программаларын эшләүҙе тыймаясаҡ.

Яңылыҡтар иҫәбенә 6-11 кластарҙа аҙнаһына бер тапҡыр һөнәри йүнәлеш, өлкән кластарҙа башланғыс хәрби әҙерлек дәресе инәсәк. Уҡыусыларҙы хеҙмәт дәресенә, шулай уҡ файҙалы йәмғиәт эштәренә йәлеп итеү ҡарала. Йәмғиәтте өйрәнеү, тарих, әҙәбиәт кеүек дәрестәрҙә балалар коррупция күренештәренә ҡаршы тороу һабаҡтары ла аласаҡ, ришүәтселек өсөн енәйәт яуаплылығы менән таныштырыласаҡ. Мәктәпте уңышлы тамамлаусы 9-11 класс балаларын көмөш миҙал менән бүләкләү кире ҡайтарыласаҡ. Яңылыҡтар балалар баҡсаһына йөрөүсе иң кескәйҙәргә лә ҡағыласаҡ: уларҙы рәхмәт әйтергә һәм Ватанды һөйөргә өйрәтәсәктәр. Әйткәндәй, һөйөргә өйрәтеп буламы?.. Быныһы һүҙ ыңғайы килеп тыуған риторик һорау булды. Тыуған илгә һөйөү тәрбиәләү мәктәптәрҙә лә ныҡ ҡуйыласаҡ. Мәҫәлән, әҙәбиәт дәреслегенә А.Фадеевтың "Йәш гвардия" романы кире ҡайтарыласаҡ, ә ОБЖ урынына "Хәүефһеҙлек нигеҙҙәре һәм Ватанды һаҡлау" дәресе инә башлаясаҡ.

Әлегә мәғариф чиновниктары һәм депутаттар яңы быуын тәрбиәләүгә ошондайыраҡ ҡарашта. Нисек кенә булмаһын, Ватанға һөйөү тәрбиәләү ҡанундары дәреслектәрҙә генә тороп ҡалмаһын ине, ул һәм, ғөмүмән, тәрбиә эше, дәрестән тыш та, тормош һәм балаларҙың аң-тойғо кимәленә бәйләп алып барылһын, ата-әсәләр ҡатнашлығында йөрәк түренән сыҡҡан көндәлек бурысҡа әүерелһен ине, сөнки йөрәктән сыҡҡан ғына йөрәктәргә барып етәсәк. Илебеҙ халыҡтарының рухи хазинаһын, дөйөм кешелек ҡиммәттәрен, данлы тарихыбыҙҙы баҫырып ҡуйыу, кәметеп-кәмһетеү-юҡҡа сығарыу маҡсатын ҡуйған көнбайыш идеологияһының емергес тәьҫире, "америкалаштырыу вакциналары" өлкән быуынды бөгә алмаһа ла, урта һәм йәш быуын вәкилдәренең ҡайһылары аңын ағыулап өлгөрҙө лә, буғай. Бына ни өсөн мәктәп уҡыусылары менән тәрбиә эшенә "шул сәғәттән - был сәғәткә тиклем" ваҡыт эсендәге эш тип түгел, ә йөрәк ҡушыуы буйынса тотонорға һәм бөтә ғәмәлдәр менән мөмкинлектәрҙе файҙаланырға кәрәк буласаҡ. Тормошобоҙҙа әлегә бөтәһе лә китаптағыса түгел икәнен күреп, сағыштырып, бала күңеле буталана күрмәһен...

**Был айҙа тағы ла ошондай иҫтәлекле көндәр билдәләнә:**

Белем көнө, Тыныслыҡ өсөн профсоюздар хәрәкәте **(1)**, Икенсе Бөтә донъя һуғышы бөткән көн (1945), Рәсәй гвардияһы, Бөтә донъя һаҡал көндәре **(2)**, Нефть һәм газ сәнәғәте эшсәндәре, Терроризмға ҡаршы теләктәшлек, Урта Урал халыҡтары көндәре **(3)**, Ядро тәьмин итеү белгестәре, Халыҡ-ара тхэквондо көндәре **(4)**, Халыҡ-ара мәрхәмәтлек **(5)**, Рус армияһының французлдарға ҡаршы Бородино яуы (1812), Ленинградты һаҡлаусылар, Финансистар, Халыҡ-ара грамоталылыҡ, Журналистарҙың теләктәшлек һәм Башҡортостан халыҡтарының милли кейеме көндәре **(8 август)**, Халыҡ-ара матурлыҡ, Тәүге медицина ярҙамы күрһәтеү көндәре **(9)**, Танкист көнө, Фашизм ҡорбандарын иҫкә алыу, Бөтөн донъя үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙы иҫкәртеү, Байкал, Бөтөн донъя торна көндәре **(10)**, Тәрбиә эше белгестәре, Бөтөн Рәсәй айыҡлыҡ **(11)**, Программалаусы, Парикмахер көндәре **(13)**, Халыҡ-ара демократия, Рәсәйҙә санитар-эпидемиология хеҙмәте, "Гринпис" экология ойошмаһы көндәре **(15)**, Урман эшсәндәре көнө **(16)**, Е.Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр яуы башланыуға - 250 йыл (1773), Ҡорал эшләүселәр, "Смайлик" көндәре **(19)**, Халыҡ-ара тыныслыҡ көнө **(20)**, Бөтөн донъя автомобилһеҙ көн **(22)**, Машина эшләүселәр **(24)**, Ядро ҡоралын тулыһынса юҡ итеү өсөн көрәш **(26)**, Тәрбиәсе һәм мәктәпкәсә хеҙмәткәрҙәр, Бөтөн донъя туризм көндәре **(27)**, Атом сәнәғәте хеҙмәткәрҙәре, Генераль директорҙар көндәре **(28)**, Йөрәк көнө **(29)**, Донецк һәм Луганск халыҡ республикалары, Херсон һәм Запорожье өлкәләренең РФ субъекты хоҡуғында Рәсәйгә ҡушылған көнө **(30 август, 2022)**.

**Һарысайҙа тыуғандар:**

**1 -** табип, медицина фәндәре докторы, БДМУ профессоры, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Тәлғәт Зөлҡәрнәевҡа - 80 йәш** (1943).

**10 -** Башҡортостандың халыҡ шағиры, журналист, 1978-1999 йылдарҙа "Башҡортостан ҡыҙы" журналының баш мөхәррире, БР һәм РФ -ның атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Һ.Дәүләтшина, Аҡмулла исемендәге премиялар лауреаты, "Почет билдәһе" ордены кавалеры **Гөлфиә Юнысоваға - 75 йәш** (1948).

**15 -** күренекле ҡурайсы, актер, импровизатор, композитор, РСФСР-ҙың атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты **Ишмулла Дилмөхәмәтовтың тыуыуына - 95 йыл** (1928-1984).

**-** кинорежиссер, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы һәм Ш.Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты **Булат Йосоповҡа - 50 йәш** (1973).

**16 -** киносценарист, драматург, тәржемәсе, БР Кинематографтар берлеге рәйесе, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Ш.Бабич исемендәге йәштәр премияһы лауреаты **Зөһрә Бураҡаеваға - 50 йәш** (1973).

**18 -** физика-математика фәндәре докторы, профессор, академик, 2000-2010 йылдарҙа БДУ ректоры, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре **Мөхәмәт Харрасовҡа - 75 йәш** (1948).

**25 -** күренекле йырсы, ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Учалы районының почетлы гражданы **Абдулла Солтановтың тыуыуына - 95 йыл** (1928).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ? Балаларҙы хеҙмәт тә тәрбиәләй, ләкин һуңғы йылдарҙа уларҙы ҡайһы бер мәктәп эштәренә йәлеп итеү ата-әсәләр тарафынан хупланмай, хатта тыйыла килде. Был дөрөҫмө?

***Рәлиә БИКТИМЕРОВА, журналист, Шамонин мәктәбе хеҙмәткәре:*** Баланы хеҙмәткә өйрәтеү - ул иң тәүҙә ата-әсәнең төп бурысы. Әгәр ҙә балаң ысын кеше булып үҫһен, эштән ҡурҡып тормаһын һәм киләсәктә һайлаған һөнәрен еңел үҙләштерһен, тиһәң, уны бәләкәйҙән көсө еткән эшкә ҡушып, белмәгәнен өйрәтеп, күнектереп үҫтерергә кәрәк. Хеҙмәт тәрбиәһе өйҙә, ғаиләнән башлана тигән һүҙемде үҙебеҙҙең балалар миҫалында дауам итмәксемен. Беҙҙең ҡаланан ситтә йәшәүебеҙ балаларҙы эшкә өйрәтеп үҫтереү өсөн бик уңайлы. Иртә яҙҙан бөтөн Шамонинда баҡса эштәре башлана. Ерҙе һөрөп сығыу менән артынса уҡ балалар картуф, кишер, сөгөлдөр сәсеүҙә ярҙам итешә башлайҙар. Унан һуң сиратта түтәлдәргә һыу һибеү, утау эштәре башлана, бында ла улар беҙҙең менән бергә баҡсала ҡайнай. Уңыш йыйыу иһә күңелле мәлдәрҙең береһе, улар йәй буйына үҙҙәре үҫтерешкән уңышты шатланып йыя. Бында уларҙың үҙ хеҙмәт емештәрен күреп ҡыуанышыуы мөһим. Тимәк, улар шул ваҡыт ниндәйҙер һөҙөмтәгә өлгәшеү өсөн көс түгеү, тырышлыҡ, уңғанлыҡ кәрәклегенә үҙ тәжрибәләрендә инана.

Шунының өсөн дә беҙ балаларҙы мәктәп эштәренә йәлеп итеүгә лә бер ваҡытта ла ҡаршы түгелбеҙ. Бер яҡтан, бөгөн мәктәптә балаларҙы эшкә әллә ни йыш йәлеп тә итмәйҙәр. Беҙҙең замандарҙағы кеүек, көн дә класс бүлмәһе, кабинеттар иҙәнен йыуыу юҡ хәҙер. Каникул алдынан ғына бергәләшеп, йыуып-таҙартып ҡайталар. Тик шул сүрәттә лә, баламды эшкә ҡушмағыҙ, тип килеп йөрөүсе ата-әсәләр, ҡыҙғаныҫҡа, бар, нишләйһең... Уның ҡарауы, күпселек ата-әсәләр был мәсьәләгә дөрөҫ, ыңғай ҡараште.

Был тәңгәлдә бит шуныһы ла мөһим: балалар үҙҙәре бысратҡанды үҙҙәре таҙартып, үҙҙәре йыйыштырырға, йәғни үҙ ҡылыҡтары өсөн яуаплылыҡ тойорға ла өйрәнә, минеңсә. Өҫтәүенә, улар мәктәптең иҙән йыуыусылары хеҙмәтен баһаларға, уларға ихтирам менән ҡарарға өйрәнә. Балаларҙың шулай уҡ мәктәп яны участкаһында эшләүҙәренә лә ҡаршылығым юҡ, тик уҡыусыларҙың йәшенә һәм мөмкинлектәренә ярашлы эштәрҙе генә ҡушһындар, тигән теләктәмен. Ауыр һәм бысраҡ эштәр менән балаларҙы биҙҙереп тә ҡуйырға мөмкин бит, юғиһә. Үҫенте һәм сәскәләргә һыу һипкәндә, мәҫәлән, ауыр, көс етмәҫтәй һауыттар биреп ҡуйырға ярамай. Ҡыҫҡаһы, мин хеҙмәт тәрбиәһен ғаилә менән мәктәп берләшеп, килешеп алып барырға тейеш, тигән фекерҙәмен.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостадың һаулыҡ һаҡлау министрлығы Өфөнөң һаулыҡ һаҡлау учреждениеларын модернизациялау программаһы проектын тәҡдим итте. Документ ведомствоның рәсми сайтында йәмәғәт фекер алышыуы өсөн баҫылған. Бынан алда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәткә һәм Һаулыҡ һаҡлау министрлығына Өфөлә беренсел медицина ярҙамын этаплап модернизациялау планын әҙерләргә һәм уны бюджеттан финанслауҙы тәьмин итергә, тәү сиратта капиталь ремонтҡа мохтаж поликлиникалар исемлеген асыҡларға ҡушты.

✓25 августан 27 августҡа тиклем Санкт-Петербург ҡалаһында Башҡортостан Республикаһы көндәре үтә. Күләмле сара барышында Башҡортостандың иҡтисади, инвестиция һәм туристик мөмкинлектәре менән таныштыралар, башҡорт еңел сәнәғәте модаһын, тауарҙар йәрминкәһен һәм "Ҡаҙ һәм бал" гастрофестивален күрһәтәләр. Шулай уҡ Рәсәйҙең һәм Ленинград өлкәһенең эшҡыуарҙары менән бизнес-осрашыуҙар көтөлә. Шулай уҡ "Башҡортостан дуҫтарын йыя" концерты үтә. Билдәле йырсылар Аҫҡар һәм Илдар Абдразаҡовтарҙын, Николай Басковтың сығыш яһауы көтөлә.

✓Башҡортостан башлығы Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында легендар йырсы, халыҡ артисы Абдулла Солтановтың вафатына бәйле ҡайғы уртаҡлашыу белдерҙе. "Башҡортостан халҡыбыҙҙың лайыҡлы улы, легендар йырсы, халыҡ артисы Абдулла Афзал улы Солтанов менән хушлаша. Бөтә республика менән бергә ҡайғырам. Туғандарының һәм яҡындарының ҡайғыһын уртаҡлашам", - тип яҙа ул.

✓Якутскиҙа Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры Н.Н. Кычкин иҫтәлегенә йөҙ шаҡмаҡлы шашка буйынса Бөтә Рәсәй ярыштары тамамланды. Башҡортостан шашкасылары Яҡут республикаһында үткән Бөтә Рәсәй ярыштарында дүрт алтын миҙалдың өсәүһен яуланы. Александр Георгиев классик һәм "йәшен тиҙлегендәге" уйында еңеүсе булып танылһа, Айгөл Иҙрисова "йәшен тиҙлегендәге" уйында беренселек яуланы. Башҡортостандан тағы ла бер вәкил Муродулло Амриллаев етенсе урын алған.

*✔ Ләлә Сафина ошо дәреслек ярҙамында башҡорт телен 100 сәғәттә өйрәнә аласаҡһығыҙ, тип ышандыра. Мәктәптә уҡыусылар башҡорт телен өйрәнә. Әммә ата-әсәләр үҙҙәре телдә белмәүҙәре арҡаһында уларға ярҙам итә алмай.*



ҠЫҪҠАСА

# ХӘҮЕФ ТӨЙМӘҺЕ - МӘКТӘПТӘРГӘ

**Бөтә мәктәптәрҙә лә ғәҙәттән тыш хәл һәм янғын хаҡында хәбәр итеү өсөн хәүеф төймәһе булырға тейеш.** Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса баш идаралығы белгестәре республиканың барлыҡ уҡыу йорттарын тикшергән, төбәктә уларҙың һаны - 1291. Ведомстволың матбуғат хеҙмәте начальнигы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Андрей Зайцев һыҙҙаренсә, белгестәр тикшереү барышында автоматик янғын системаларына, эвакуация юлдарының торошона, электр йыһаздарына айырыуса ҙур иғтибар бүлгән. Иҫкәрмә алған мәктәптәр яңы уҡыу йылына тиклем етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә тейеш. "Белем көнөндә, 1 сентябрҙә, Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре барлыҡ мәктәптәрҙә дежурҙа буласаҡ. Улар Бөтә Рәсәй асыҡ хәүефһеҙлек дәрестәре үткәрәсәк", - тип белдерҙе Андрей Зайцев.

✔ **"Яғыулыҡҡа хаҡ күтәрелеүе арҡаһында төбәк аграрийҙарының сығымдары өс миллиард һумға тиклем артҡан", - Башҡортостан вице-премьеры, республиканың ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов шулай тип белдерҙе.** "Бөгөн урып - йыйыштырыу эштәренә, ужым сәсеүгә, баҫыуҙарҙы эшкәртеүгә 80 мең тонна тирәһе дизель яғыулығы талап ителә. Бер тонна йәйге яғыулыҡтың ваҡ күмәртә хаҡы 71,8 мең һумға тиклем күтәрелде. Июль башынан хаҡ 35 процентҡа йәки 18,5 мең һумға артты. Былтырғы осор менән сағыштырғанда 22 процентҡа күберәк", - тип аңлатты Илшат Фәзрахманов. Шул уҡ ваҡытта ауыл хужалығы министры, барлыҡ ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, былтырғы запастар менән бергә бөтә килеттәр ҙә тулы буласаҡ, тип тынысландырҙы. "Мал аҙығы менән тәьмин итәсәкбеҙ һәм 2024 йылға яҡшы күрһәткестәр менән аяҡҡа баҫасаҡбыҙ", - ти Фәзрахманов.

✔ **Башҡортостанда пенсионерҙарға өлкән быуын граждандар өсөн ойошторолған төрлө сараларҙа ҡатнашыу мөмкинлеге биреүсе сертификаттар тапшырыла, тип иҫкә төшөрҙөләр БР Ғаилә, хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығында.** Ҡыҙыҡһыныуҙар буйынса программаларҙа, физкультура-һауыҡтырыу һәм ял сараларында ҡатнашыу өсөн сертификаттарҙы республика халыҡҡа социаль ярҙам үҙәге филиалдарында сират тәртибендә алырға мөмкин. Сертификаттың хаҡы - 2 мең һум. "Уны алыу өсөн был хаҡта үҙәктән телефондан шылтыратыу, СМС-хәбәр, почта карточкаһы аша йәки электрон почтанан саҡырыу алғандан һуңғы өс көн эсендә килергә кәрәк. Килмәгән осраҡта сертификат сират буйынса торған киләһе кешегә биреләсәк, - тип хәбәр итәләр Хеҙмәт министрлығынан. - Сертификатты алғандан һуң уны ниндәй клуб, спорт залы йә уҡыу ойошмаһында шөғөлләнеү өсөн файҙаланыуҙы пенсионер үҙе хәл итә".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН ӨЙРӘН!

**"Башҡорт теле: яңы ҡараш 2.0" тип аталған дәреслек донъя күрҙе. Ул өлкәндәргә телде өйрәнергә ярҙам итәсәк, шул иҫәптән өҫтәмә материал булараҡ мәктәптә лә ҡулланыла аласаҡ. Проект сиктәрендә дәреслектең мобиль ҡушымтаһы эшләнгән, шулай уҡ нығытма материал өсөн 10 видеодәрес төшөрөлгән.**



Проект "Донъя халыҡтары" ойошмаһы тарафынан Башҡортостан Башлығы Гранты ярҙамында тормошҡа ашырылған. Гранттың суммаһы - 3 млн һум. Проект етәксеһе урынбаҫары Фәнзилә Ғәзизова әйтеүенсә, дәреслектең тиражы 1500 экземпляр, уның бер өлөшө БР Мәғариф һәм фән министрлығына, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына тапшырылған, үҙ сиратында, улар уны халыҡҡа таратасаҡ. "Башҡорт теле: яңы ҡараш 2.0" дәреслеге авторҙары Рида Латыпова менән Ләлә Сафина билдәләүенсә, ул балаларҙан бигерәк, уларға башҡорт телен өйрәнергә ярҙам итергә теләгән ата-әсәләргә тәғәйенләнгән. 10 өлөштән торған дәреслектең методик нигеҙен билдәле башҡорт, шулай уҡ сит ил авторҙары хеҙмәттәре тәшкил итә. Ләлә Сафина 21-се лицей уҡытыусыһы, ул ошо дәреслек ярҙамында башҡорт телен 100 сәғәттә өйрәнә аласаҡһығыҙ, тип ышандыра. "Мәктәптә бөтөн уҡыусылар ҙа башҡорт телен өйрәнә. Әммә ата-әсәләр үҙҙәре телдә белмәүҙәре арҡаһында уларға ярҙам күрһәтә алмай. Төрлө китаптар, дәреслектәр күп ул, тик улар башлыса телдә яҡшы белеүселәргә тәғәйенләнгән, сөнки уларҙың авторҙары - ғалимдар. Ә был дәреслектә ябай һөйләмдәр ҡулланыла, улар телмәр үҫтереүгә йүнәлтелгән", - ти Ләлә Сафина.

"Донъя халыҡтары" ойошмаһы етәксеһе Фәнзил Әҙелбаев проекттың мобиль ҡушымтаһын да эшләтеп күрһәтте. Ул Android, Apple платформаларына ҡуйыла, шулай уҡ компьютерҙарға ла ҡуйып буласаҡ. Уның ярҙамында һәр кем үҙенең белем кимәлен тикшерәсәк.

# ӘЙҘӘ, ЯҢЫ МАЙҘАНҒА!

**Рәсәйҙә иғлан ителгән Педагог һәм остаз йылын Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы фән һәм мәғариф лозунгыһы аҫтында үткәрә һәм улар йәмәғәтселеккә "Фәнни майҙан" проектын тәҡдим итә.**

Мәғариф, фән, башҡорт телен һәм әҙәбиәтен үҫтереү буйынса комиссия ултырышында был проектты ойоштороу мәсьәләләре тикшерелде.

-Исемдәре киң билдәле ғалимдарҙы һәм уларҙың асыштарын танытыу менән бер рәттән, беҙгә йәш, һәләтле балалар менән эшләргә, уларҙы ғалимдар, мәғрифәтселәр, йәмәғәт эшмәкәрҙәре менән таныштырыу ҙа кәрәк. Былтыр "Ижади майҙан" майҙансығы бик уңышлы эшләне. Быйыл иһә сентябрҙән "Фәнни майҙан" проектын башлап ебәрәсәкбеҙ, ул остазлыҡ нигеҙҙәренә ҡоролаcаҡ. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы иғлан иткән Фән һәм мәғрифәт йылы саралары Педагог һәм остаз йылын тағы ла байытып ебәрер, тип ышанабыҙ. Ошо мәғрифәтселәр, ғалимдар миҫалында фәндең дә, белем һәм технологиялар донъяһына төрлө азымдарҙы яһарға булышлыҡ иткән һәр уҡытыусының да абруйын күтәреү мөһим, - тине Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы президиумы рәйесе, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Эльвира Айытҡолова.

# БАЛЫҠ ҮРСЕТӘЛӘР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ишембай районындағы эш сәфәре барышында "ШӘ Зөбәйеров" крәҫтиән-фермер хужалығында булды һәм балыҡсылыҡ майҙансығы эше менән танышты.**

Бында карп, толстолобик, аҡ амур һәм ҡарабалыҡ үрсетелә. Агрофирма директоры Фәнис Зөбәйеров хужалыҡты 2020 йылдың ғинуарында асыуы хаҡында белдерҙе. Етештереү ҡеүәте - йылына 20 тонна тауар балығы. Проект буйынса 12 быуаның алтауһы эшләй башлаған. Һыу яҡлыҡтарының дөйөм майҙаны - 23 гектар. Предприятиела инкубация цехы эшләп килә. Фермер йыллыҡ етештереү ҡеүәтен 30 тоннаға тиклем еткерергә һәм туристик инфраструктураны үҫтерергә ниәтләй. Атап әйткәндә, фермер хужалығын "Башҡорт оҙон ғүмерлелеге" республика программаһында ҡатнашыусылар ҡарарға килә.Ишембай хужалығы тере балыҡ һатыуҙан тыш, вакуумлы ҡапта ҡаҡланған балыҡ етештереү менән шөғөлләнә. Был продукция Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат һәм Мәләүез ҡалаларының сауҙа кәштәләренә һатыуға ҡуйыла. Ә балыҡ үрсетеү материалы Ырымбур һәм Киров өлкәләренә, Татарстан һәм Удмурт республикаларына оҙатыла.

# САУҘА ШӘП БУЛҒАН!

**Үткән аҙнала Стәрлетамаҡта үткән "Сауҙагәр 2.0" фестивале ҡунаҡтары 9 млн һумлыҡ тауар һатып алған. Кәсепселек фестивале сиктәрендә 6.5 млн һумлыҡ әйбер һатылған, аҙыҡ-түлек тәҡдим ителгән майҙансыҡта табыш 2.5 млн һум булған.**

Былтыр был сара ваҡиғалар туризмы өлкәһендә "Тарихи йүнәлештәге иң яҡшы туристик ваҡиға" тигән номинацияла еңеүсе булғайны. Йылдан-йыл фестиваль яҡшыра бара, былтыр унда 10 мең кеше килһә, быйыл һан 65 меңгә еткән. "Сауҙагәр 2.0" фестивалендә 238 кәсепсе ҡатнашырға ғариза бирҙе, улар республиканан ғына түгел, Һамар, Силәбе, Свердловск өлкәләренән, Татарстандан да килде. Ҡаҙағстандың ҡатнашыуы иһә сараға халыҡ-ара статус бирҙе", - ти Стәрлетамаҡ мэры Рөстәм Ғәзизов.

Быйыл фестиваль туризмға арналды. Туристик зонаға республика музейҙары инде, лекторий, VR майҙансыҡ эшләне. Стәрлетамаҡ ҡалаһы, Красноусол минераль һыуҙары, Ғафури районында урынлашҡан страус фермаһы, Маҡар тарлауығы, Атыш шарлауығы, "Башкирия" милли паркына (Йомағужа һәм Нөгөш һыуһаҡлағыстары) сәйәхәттәр ойошторолдо. Ҡырҡтартмасы, сауҙагәр, кеше көлдөрөп йөрөүселәр, аяҡ кейеме таҙартыусылар, гәзит таратыусылар, арҡан буйлап йөрөүселәр иһә фестивалгә үҙенсәлекле атмосфера өҫтәне. Кисен иһә Башҡортостандың Милли оркестры, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы һәм Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры артистары сығыш яһаны.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔24 августан 28 августҡа тиклем Өфөлә "Евразиадаға ҡаршы" милли һәм олимпия булмаған спорт төрҙәре буйынса тәүге Евразия уйындары үтә. Унда 20-нән ашыу илдән 800-гә яҡын спортсы ҡатнаша. Ярыш программаһына армрестлинг, һауа-көс атлетикаһы, гер күтәреү, бура һуғыу спорты, компьютер спорты, мас-рестлинг, арҡан тартыу, полиатлон һәм бысаҡ ырғытыу кеүек дисциплиналар буйынса ярыштар инә.

✔31 августан Өфөлә "Башҡортостан" һәм "Муха" студиялары төшөргән "Төньяҡ Амурҙары" йәнһүрәте киң экранға сыға, тип хәбәр итә баш ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте. Тәүҙә йәнһүрәт республика кинотеатрҙары экрандарына сығасаҡ, ә октябрҙән бөтә ил буйынса күрһәтеләсәк. Был - Башҡортостанда төшөрөлгән һәм Рәсәй прокатына сыҡҡан беренсе йәнһүрәт. Ул ике телдә - рус һәм башҡорт телендә төшөрөлгән.

✔Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса, алты йылда Өфөлә поликлиникаларҙы модернизациялауға 10,4 миллиард һумдан ашыу аҡса тотонорға ниәтләйҙәр. Программа бер нисә төп йүнәлешкә күҙ уңында тота: транспорт паркын яңыртыу, яңы клиник диагностикалау ҡорамалдары һатып алыу, клиникаларҙы капиталь ремонтлау һәм дауаханалар төҙөү. Атап әйткәндә, Дим районында яңы клиника барлыҡҡа киләсәк, уның майҙансығы билдәләнгән дә инде.

✔Өфөлә 16 сентябрҙән 22 сентябргә тиклем Максим Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик паркында профилле юғары уҡыу йорттары һәм колледж студенттары өсөн "ГеоВызов" I Халыҡ-ара геология чемпионаты үтәсәк. Чемпионатта Рәсәйҙең 12 төбәгенән, шулай уҡ Ҡаҙағстандан һәм Үзбәкстандан 18 команда ҡатнаша. Делегаттарҙы 11-ҙән ашыу тематик ярыш, проекттарҙы яҡлау һәм геройҙар уҙышы көтә. Чемпионатты йүнәлештәре - палеонтология, геохимия, гидрология, радиометрия, минералогия, петрография, геологик киҫелештәр төҙөү, шлих һынауы һ. б.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# ТИКШЕРЕП ТОРҺАҢ - ЯҠШЫРАҠ

**Ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев 21 августа баш ҡалабыҙҙың ҡайһы бер төҙөкләндереү һәм ремонт эштәре барған урындарына барып, эш барышы менән танышты.**

Ул тәүҙә Калинин исемендәге паркта туҡталды, бында 2,7 км оҙонлоғонда юлдарға асфальт түшәү, урналар, эскәмйәләр ҡуйыу, ял итеү зоналарын, уйын һәм спорт майҙансыҡтарын булдырыу планлаштырылған. Әлеге көнгә ер өҫтөн тигеҙләү һәм ҡомло ҡырсынташ менән ҡаплау эштәре тамамланған, паркта яңы яҡтыртыу лампаларын монтажлау башланып тора. Паркта төҙөкләндереү эштәрен 30 сентябргә тамамлау күҙаллана.

Артабан ҡала хакимиәте башлығы Теплое күле буйында алып барылған яңыртып төҙәү барышын тикшерҙе. Бында ҡырағайлашҡан ағас-ҡыуаҡтар ҡырҡып алына, яңы тротуарҙар һалына, терраса таҡталары түшәләсәк ер нығытыла, яңы бордюрҙар ҡуйыла, махсус әҙерләнгән таш плиталәр (брусчатка) һәм асфальт һалыу эштәре бара, кабель үткәрелә. Күл ярҙары буйлап ҡуласа рәүешендәге йәйәү йөрөү маршрутын, велосипедта йөрөү һуҡмаҡтарын һалыу, пляж һәм ял итеү зонаһын, спорт майҙансыҡтарын йыһазлау, пикниктар уҙғарыу һәм эттәр менән йөрөү өсөн махсус урындар булдырыу ҡаралған. Әлегә эштәрҙең 48 проценты үтәлгән, күл буйын төҙөкләндереү эштәре 2024 йылда тамамланасаҡ.

Ратмир Мәүлиев Шакша биҫтәһендәге Ҡариҙел (Өфө) йылғаһы аша һалынған күперҙәге ремонт эштәренең нисек үтәлеүен дә контролдә тота. Әлеге көнгә күперҙең ремонт барған өлөшөндә бетон ҡатламы һалынып бөткән, барьер кәртәләре һүтелеп алынған, Өфө ҡалаһы яғынан ҡомло ҡырсынташтан күпер янына тиклем һәм паром менән сығыу урынына тиклем юлдар һалынған. 18 августан Ҡариҙел (Өфө) йылғаһы аша сығыу өсөн "Князево" паром менән сығыу пункты сафҡа индерелде. 2025 йылдың 28 февраленә ошо күперҙәге төҙөлөш-монтаж эштәрен тамамлау күҙаллана.

# ӨФӨ ҠАЛАҺЫ НИ ӨСӨН МАТУР?

**Өфө ҡалаһы хакимиәте Пермь ҡалаһында йәшәүсе эшҡыуар Марина Лутченко менән баш ҡалабыҙҙа 5 яңы арт-объект ҡуйыу маҡсатында килешеү төҙөргә йыйына. Ошо контракт дисконтлы булмаҡсы: арт-объекттарҙың башланғыс хаҡы 11,99 млн һум булһа ла, эшҡыуар ҡатын уны 8,9 млн һумға тиклем кәметергә ризалашҡан.**

Конкурс документтарына ярашлы, Чернышевский һәм Мостай Кәрим урамдары сатында "Башҡорт сәйе", Мостай Кәрим скверында " - "Рәсәйҙең ҡара алтыны" исемле арт-объекттар, Салауат Юлаев исемендәге баҡсала - "Ҡулдар-йөрәк" скульптураһы, Ағиҙел йылғаһының яр буйында - "Айыу - сармат хазинаһы" һәм "Сармат боланы" скульптуралары ҡуйылырға тейеш. Һуңғыһының бейеклеге - 5 метр. Был һынлы сәнғәт объекттары углеродлы йоҡа ҡоростан яһалып, ике тапҡыр эпоксидлы ҡатлам менән ҡаплана. Скульптураларҙы эшләүсе уларҙы теләһә ниндәй һауа шарттарында ла ҡабыҙып була торған яҡтыртыу системаһы менән дә йыһазландырырға тейеш. Ошо сәнғәт объекттары бер юлы өс сығанаҡтан - федераль, республика һәм ҡала бюджеттарынан финансланасаҡ. Уларҙы ҡороу 30 ноябрҙән дә һуңға ҡалмайынса тамамланасаҡ.

Әлбиттә, баш ҡала майҙандарында, урамдарҙа зауыҡлы, заманса эстетик мөхит булдырылһын, үҙебеҙҙә ғорурланырлыҡ, Өфө ҡунаҡтарына һоҡланып ҡарарлыҡ урындар ишәйһен, тип теләргә генә ҡала.

# ЙӘШТӘРҘЕ ИЖАДҠА ӨНДӘП...

**Өфө ҡалаһы хакимиәтенең Йәштәр эштәре буйынса комитеты 19 - 20 августа Өфө ҡалаһында "Анимау" тип аталған Бөтөн Рәсәй хәҙерге йәштәр мәҙәниәте фестивале уҙғарылыуы хаҡында хәбәр итте.**

Бында донъя илдәрендә косплей һәм аниме тип аталған, иң элгәре йәшүҫмерҙәр һәм йәштәр араһында үтә популяр булған мәҙәни-сәнғәти саралар хаҡында һүҙ бара. Косплей - әҙәбиәт, театр, кино, комикстар, һынлы сәнғәт аша киң билдәле персонаждар кейемендә үҙендә башҡаларға күрһәтә белеү, ошо геройҙарҙың холоҡ-фиғелен сағылдыра алыу менән бәйле йәш кешеләр шөғөлө булараҡ билдәле, ә аниме мультипликацияның заманса жанрҙарынан хасил булған сәнғәт төрө. Былар барыһы ла йәш-елкенсәк араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Ошондай фестиваль бынан өс йыл элек шулай уҡ Өфөлә ойошторола.

Быйыл ошондай сағыу, ҡатнашыусы һәм тамашасы күңеленә хуш килгән йәштәр сараһында ҡатнашырға теләүселәр үтә күп булды. Илебеҙҙең төрлө мөйөштәренән анимация, видеоуйындар, комикстар, манга (япон анимацияһы жанры), мультисериалдар яратыусылар, костюмлы тамашаларҙы үҙ итеүселәр Ҡала мәҙәниәт һарайында йыйылды. Ҡатнашыусылар 500-ләп булһа, тамашаларға килеүселәр һаны 3500-гә етте. Сәхнәлә күрһәтелгән тамашаны космос феерияһы тип нарыҡлап булыр ине, уны барыһы ла ләззәтләнеп күҙәтте. Шулай уҡ ошо йүнәлештәге йәштәр сәнғәте буйынса белгес-спикерҙәр лекторийҙар уҙғарҙы, авторҙар аллеяһы һәм хатта йәрминкә ойошторолдо. Фестиваль ҡунаҡтары ошо сараларҙа үҙҙәренең иң яҡшы шәхси эштәрен, күнекмәләрен һәм һәләттәрен башҡаларға күрһәтә алды. Косплей һәм аниме мәҙәниәтен тамаша ҡылыусы Өфө йәштәре өсөн был ғәҙәти булмаған фестиваль ысын байрамға әйләнде. Ошо хаҡта бәйән иткәндә башҡорт әҙәбиәте, видеофильмдары, мультфильм һәм комикстары нигеҙендә лә ошондай заманса йәштәр сәнғәтенә күберәк иғтибар бирелеүен теләргә ҡала.

ҠЫҪҠАСА

# МАНАРА - УРЫНЫНДА!

**18 августа Өфөләге "Әр-Рәхим" йәмиғ мәсетенең дүртенсе манараһын урынына ҡуйҙылар.** Билдәле булыуынса, 13 мартта көслө дауылда төҙөләп ятҡан мәсеттең бер манараһы емерелеп төшкәйне. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, манараны төҙөгән саҡта инженер хатаһы киткән булған. Ҡолап төшкән манараны йүнәтеү өсөн Республика мосолмандары диниә назараты Волгодонск ҡалаһынан "Грант" асыҡ акционерҙар йәмғиәте менән килешеү төҙөгән. Предприятие конструкцияның өҫкө өлөшөн эшләп, баш ҡалаға килтергән. Манара көмбәҙе башня краны ярҙамында ҡуйылған. Бынан алда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров бер ай эсендә "Әр-Рәхим" йәмиғ мәсетенең бөтә төҙөлөш документацияһын күтәрергә һәм өйрәнергә, объекттың торошон баһаларға һәм уны төҙәү мәсьәләһе буйынса оператив штаб булдырырға ҡушҡайны.

✔ **Өфөлә "Әйҙә, уйнарға" Бөтөн Рәсәй уйын фестивале үтә. Ул 14 сентябрҙән 17 сентябргә тиклем дауам итәсәк. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров был туралағы Ҡарарға ҡул ҡуйҙы.** Был сара хәҙерге бала саҡтың уйын мәҙәниәтен үҫтереү, бала өсөн уйындың һәм уйынсыҡтарҙың әһәмиәтен, шулай уҡ балаларҙың уйынға хоҡуҡлы булыуын тағы бер иҫкә төшөрөү йүнәлешендә әүҙем эшләгән фән, мәғариф, сәнғәт, ата-әсәләр һәм балалар йәмғиәтселектәре өсөн уртаҡ майҙансыҡ буласаҡ. Фестивалдең төп ваҡиғаһы тип "Уйын ғына түгел: Рәсәй уйынсыҡ етештереү сәнғәтенең роле, тотҡан урыны һәм үҫеше" тип аталған пленар ултырыш билдәләнә, унда РФ Федераль Йыйылышы Федерацияһы Советы, Рәсәй Сәнғәт һәм сауҙа министрлығы вәкилдәре, эксперттар ҡатнашасаҡ. Фестиваль Совет майҙанында үтә. 4 көн эсендә етештереүселәр үҙҙәренең уйынсыҡтарын, балалар өсөн иң яҡшы майҙансыҡтар тәҡдим итәсәк. Һәр көн кисен иһә билдәле артистар сығыш яһаясаҡ, йәнһүрәттәр күрһәтеләсәк. Фестиваль көн һайын 10.00-дан 22.00 сәғәткә тиклем эшләй. Эшлекле программаға теркәлеү 31 августҡа тиклем.

✔ **2 сентябрҙә Өфөлә 11-се тапҡыр "Һөт иле" фестивале үтәсәк. Быйыл ул Дуҫлыҡ монументы эргәһендәге Ағиҙел яры буйында "Байрамға ҡушыл" тигән девиз менән ойошторола, тип хәбәр итә Башҡортостан хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте.** Фестиваль ҡунаҡтарын, йола буйынса, бер стакан һөт менән ҡаршы аласаҡтар. Быға тиклем байрамда ҡатнашыусылар 60 мең стакан һөт эскәйне, дөйөм алғанда был - 12 тонна. "Һөт иле - 2023" фестивалендә аттракциондар, спорт майҙансыҡтары, фудкорт зонаһы, һөт йәрминкәһе, ферма, балалар өсөн оҫталыҡ дәрестәре эшләйәсәк. Ҡатнашыусылар араһында 449 (баш ҡаланың йәшенә тиң) кг "Салауат" туңдырмаһы отторасаҡтар. Шулай уҡ бай концерт программаһы әҙерләнгән. "Һөт иле" сиктәрендә гастрономия фестивале, коляскалар парады, һөт темаһына костюмдар конкурсы, квестар ҡаралған. Иң әүҙемдәргә бүләктәр әҙерләнгән.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Гастрит

❖ Гастриттан көнөнә 2 тапҡыр 0,2-0,3 грамм мумиены һөткә йәки балға ҡушып, ас ҡарынға йоторға. Был рәүешле 25-28 көн дауаланырға, 10 көнгә туҡталып тороп кире ҡабатларға.

❖ Юл япрағының (подорожник большой) өлгөргән орлоҡтарын кәһүә тарткысҡа онтарға. Бысаҡ осона ғына алып, һыу менән бергә көн һайын эсергә.

❖ Ҡарағай тубырсығын йыйып, өҫтөнә сыҡҡансы бал ҡушырға һәм 2-3 айға ултыртып ҡуйырға. 2 кг тубырсыҡҡа 1 кг бал нисбәтендә алырға. Әҙер дауаны көнөнә 3-4 тапҡыр ашаҙан алда 1-әр ҡалаҡ ашарға.

❖ 1 балғалаҡ балды бүлмә температураһындағы 1 стакан һыуға иҙеп, 1 балғалаҡ һеркә ҡушырға һәм эсергә. Дауаланыу - 3 ай.

## Бауыр циррозы

❖ 20 грамм ҡалған үләне (лапчатка прямостоячая) тамырына 1 л һыу ҡойорға, 600 грамм тирәһе ҡалғансы ауыҙы ябыҡ эмалле һауытта ҡайнатырға. 20 сәғәт төнәтеп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 50-шәр грамм эсергә. Аҙағынан бер нәмә эсмәҫкә, тик төнәтмәгә 1 балғалаҡ бал ҡушып ашарға.

## Арпа

❖ Күҙгә арпа йыш сыҡһа, көн дауамында 5 тапҡыр 4 бөртөк гөлбаҙран (пижма) сәскәһен ашап, аҙағынан һыу эсергә. Бер нисә көн шулай дауаланырға.

❖ Юл япрағының 5 япрағын һыуыҡ һыуҙа йыуып, ауыртҡан урынға ябырға. Япраҡтарҙы 5 минут һайын алмаштырып торорға. Шулай уҡ юл япрағы өҫтөнән бешкән йомортҡаны баҫып, һыуынғансы тоторға була.

❖ 10-15 киптерелгән календула сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, йылыға төрөргә һәм 30 минут төнәтергә. Саранан сылатҡыстар яһарға.

Гәлиә ШӘМСИЕВА
әҙерләнә.

✓ ***Америка ғалимдары Украинаға килеп, әлеге үлемесле биологик препараттарҙы психиатрия дауаханаһы ауырыуҙарында, төрмәләрҙә ултырыусыларҙа, хәрби әсирҙәрҙә һынап ҡарай. Ғәҙәттәге фашизм, башҡа һүҙ табыуы ла ҡыйын...***



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Диңгеҙ бөркөтө**
**(Большой баклан)**



Был ҡоштар төркөмөнә ҡараусылар ғәҙәттә ҡаҙҙан йәки өйрәктән саҡ ҡына ҙурыраҡ. Ҡап-ҡара, металл ялтырауығы биреп тороусы төҫтә. Оҙон ҡанаттары, муйыны һәм ҡойроғо менән айырылып тора.

Диңгеҙ бөркөтөнөң ҡаурыйҙары ҡара йәшкелт, ҡурылдай тирәһе аҡ, суҡышының ике яғынан һары табы бар. Суҡышы бер аҙ аҫҡа бөгөлгән. Йәш ҡоштар асығыраҡ төҫтә була, уларҙың ҡорһаҡ аҫты ла ағыраҡ. Йөҙгәндә, ултырғанда, осоп барғанда баштарын өҫкәрәк тоталар. Ҡоро ерҙә - муйынын һуҙып, ҡанаттарын йәйеп вертикаль рәүештә, ә һыуҙа иһә ҡойроҡтарын һыуға тығып, суҡышын күтәреп, бик "тәрән" ултыра. Яҡшы сума. Тиҙ оса, бер аҙ һыу өҫтөнән йүгереп барып ҡына осоп китә. Тауышы - тоноҡ, ыңғырашҡан кеүек тауыштар сығара.

Көньяҡ Уралға яҡын оя ҡорған ерҙәре - Волга дельтаһы һәм Каспий буйы райондары. Диңгеҙ бөркөттәре күмәкләп, колониялар менән йәшәй. Оялары ағаста, уны ботаҡтар һәм үләндән ҡоралар. Йомортҡалары күгелйем, аҡ таптары бар. Ғәҙәттә, 4-6 йомортҡа һалалар. Беренсе йомортҡаһын һалғас та, инә ҡош баҫырға ултыра, шуға ла бәпкәләре бер нисә көн айырма менән барлыҡҡа килә. Уларҙың ҙурлыҡтары ла төрлөсә була.

1891 йылда Асылыкүлдә диңгеҙ бөркөтө осрай. Ҡош осраҡлы рәүештә генә осоп төшкән булырға тейеш. Башҡа йылдарҙа диңгеҙ бөркөтө беҙҙең яҡтарҙа күренмәй. 2001 йылда иһә ғалимдар Федоровка районы Бала Сытырман ауылы эргәһендә урынлашҡан "Балыҡ" балыҡ хужалығының быуаһында диңгеҙ бөркөттәрен күрә. Быуала бөтәһе 19 ҡош була, уларҙың 6-һы - йәш ҡош, сөнки ҡорһаҡ аҫтары аҡһыл. Оялары табылмай. Киләһе йыл йәй тағы ла диңгеҙ бөркөттәре ошо уҡ быуала йәшәй.

Балыҡ менән туҡлана. Ырымбур өлкәһендә диңгеҙ бөркөттәре оя ҡора. Уларҙың һаны йылдан-йыл артып бара.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

**Хәтерегеҙҙәлер, ошо йылдың 5 майында ғына әле Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы (ВОЗ) башлығы, ниһайәт, коронавирус менән бәйле ғәҙәттән тыш хәлдең тамамланыуы хаҡында белдергәйне. Хәйер, уның белдереүен көтөп торманы халыҡ, әллә күпмегә алдараҡ тулыһынса туғарылып, иркенгә сыҡты, битлектәр сисеп ырғытылды, өймәкләшеп һәр төрлө сараларға йөрөй башланылар - ҡыҫҡаһы, кеше ихтыярын ирекһеҙләүҙең был төрөнән рәхәтләнеп арынды әҙәм балаһы.**

# ЕВРОПАЛА...

## тағы ковид шәүләһе



Үкенескә, тантана көйө оҙаҡ уйнаманы, баяғы ҡәһәр һуҡҡыры Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы яңынан телгә килде: АҠШ, Ҡытай һәм Европа буйлап коронаның яңы шәүләһе атлай...Уныһы Эрис тип атала, беҙгә яҡшы таныш "Омикрон"дың бер туған ҡустыһы, имеш. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, яңы штамм бөгөн донъяның 51 иленә: Ҡытай, АҠШ, Бөйөк Британия, шулай уҡ Европа менән Азияның ҡайһы бер илдәренә үтеп ингән һәм һуңғы 4 аҙна эсендә генә лә (17 июль - 13 август) уны йоҡтороусылар һаны 1,4 миллионға еткән, ә вафат булыусылар - 2,3 мең. Роспотребнадзор апрелдәге хәбәрендә үк әле Рәсәйҙә был вирусты йоҡторған 17 кеше хаҡында телгә алһа, 16 августҡа ҡарата, беҙҙә был вирус менән сирләүселәр юҡ, тип белдерҙе.

Хәйер, шатланырға бер ҙә генә сәбәп түгел был, иртәгә сит илдәрҙә ял итеүселәр ошо зәһәр "күстәнәс"те мотлаҡ эйәртеп алып ҡайтасаҡ. Кеше ҡурҡытҡандан түгел. Гел хәүефләнеп, ковид көтөп йәшәү депрессияһы ла түгел. Мәсьәләгә ысынтылап, айыҡ ҡарау кәрәктер. Ни тиһәң дә, өс йыл эсендә Рәсәйҙең иң күп үлем һаны теркәлгән 10 ил иҫәбендә икәнен онотмайыҡ. Джон Хопкинс университеты мәғлүмәттәре буйынса, өс йыл пандемия осоронда 675 млн 186 кеше, йәғни Ер шарының һәр 12-се кешеһе сирләгән. Дөрөҫөн әйткәндә, был һандар байтаҡҡа артығыраҡтырҙа, сөнки күптәр еңелсә кисереп, зәһәр сирҙе аяғөҫтө үткәреп ебәрҙе һәм дөйөм статистикаға инмәй ҡалды. Шулай итеп, донъя буйынса үлем күрһәткесе 7 миллионға барып етә, ти эксперттар. Росстат мәғлүмәттәре буйынса иһә Рәсәйҙә 398,4 мең кеше яҡты донъяны ҡалдырып китте. Был донъя буйынса 4-се урын. Беренсе урында - 1 млн 124 үлем күрһәткесе менән - АҠШ, 2-се урында Бразилия (701,5 мең), 3-сө урында - Һиндостан (531,6 мең).

Кешегә соҡор ҡаҙыһаң, үҙең төшөрһөң, тигәндәй, АҠШ-ты 1 млн ҡорбан бер нисек тә айыҡтыра алмаған, күрәһең. Киң мәғлүмәт сығанаҡтары хәбәр итеүенсә, АҠШ бөгөн яңы пандемия әҙерләү "хәстәрҙәре" менән мәшғүл: фәҡәт ошо бурыс менән шөғөлләнеү өсөн махсус идара итеү буйынса дәүләт структураһы төҙөлә. Бөгөн бит берәүгә лә сер түгел: Ҡытай лабораторияһынан килеп сыҡҡан иң тәүге коронавирус та Америка продукты, уның заказы ине, тиҙәр. Һәр хәлдә, был вирус сығанағын ниндәйҙер мәмерйәләге ғәйепһеҙ ярғанаттарҙан эҙләү, асылда, енәйәттән эҙ яҙҙырырға маташыу булды.

Бөгөн бөтөн донъя шаһит: АҠШ әҙәм үлтереүсе вирустар эшләп сығарыусы бындай биолабораторияларҙы 400-ләгән илдә урынлаштырып сыҡҡан, шуларҙың илленләбе - Рәсәй сиктәре буйында эшләй. Демократтар партияһынан АҠШ президентлығына кандидат Роберт кесе Кеннеди һөйләүенсә, Пентагон Украиналағы лабораторияларында ла ҡурҡыныс биологик ҡорал әҙерләүгә бик күп аҡса күсерә. Был ҡоралды әҙерләүҙә яңы синтетик биологияның бөтә төрҙәре һәм ген инженерияһы ысулдары файҙаланыла. Америка ғалимдары Украинаға килеп, әлеге үлемесле биологик препараттарҙы психиатрия дауаханаһы ауырыуҙарында, төрмәләрҙә ултырыусыларҙа, хәрби әсирҙәрҙә һынап ҡарай. Кем әйтеүенсә, ғәҙәттәге фашизм, башҡа һүҙ табыуы ла ҡыйын...

Әлеге ваҡытта, Рәсәйҙең химик радиация һәм биологик һаҡ ғәскәре башлығы Игорь Кириллов әйтеүенсә, АҠШ белгестәре төрлө вирустар мутацияһын өйрәнә, вируслы бөжәктәр таратыу өсөн уларҙы махсус үрсетеү менән мәшғүл. Хәрби эксперт, химик һәм биологик ҡорал буйынса БМО комиссияһының элекке ағзаһы Игорь Никулин әйтмешләй, АҠШ-ҡа үлемесле вирустар Рәсәй территорияһында тулы ҡеүәтендә биологик һуғыш алып барыу өсөн кәрәк. Былай барһа, киләсәкке пандемия ковидҡа ҡарағанда ла хәүефлерәк буласаҡ, ти эксперт, сөнки унда Эбола, хантавирус, түләмә (сибирская язва), конго-ҡырым биҙгәге һәм башҡа сирҙәрҙе тыуҙырыусы споралар файҙаланыласаҡ һәм улар Рәсәй биләмәләренә таратыласаҡ.

Ошо сәбәпле Рәсәй Президенты Владимир Путин яңыраҡ булып үткән "Биологик хәүефһеҙлеккә глобаль янауҙар. Хәл итеү юлдары" тип аталған халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияға төбәп әйтелгән сәләмләү һүҙҙәрендә биологик янауҙарға ҡаршы донъя йәмәғәтселеген берҙәм һәм ныҡышмал көрәшергә саҡырҙы. Был тәү сиратта бынан ярты быуат элек көсөнә ингән Биологик һәм ағыулы ҡорал төрҙәрен тыйыу тураһындағы конвенцияға ҡағыла, ләкин һуңғы ваҡыттарҙа, үкенескә, был нигеҙ документ принциптары даими һәм тупаҫ рәүештә боҙола. Вашингтон ошо юҫыҡта үҙ адресына иҫкәртеүҙәргә ҡолаҡ та һалырға йыйынмай, РФ сиктәре буйында биолабораторияларын урынлаштырыуҙы дауам итә. Улай ғына ла түгел, йәшерен рәүештә биологик ҡорал етештереүҙә Мәскәүҙе ғәйепләп сығыш яһай. Бынһы инде бөтөнләй сама юғалтыу билдәһелер. Әйтәләр бит, иң яҡшы һаҡланыу сараһы - һөжүмгә күсеү, типме әле? Тап шуның классик миҫалы инде был. "Беҙҙең ил биологик һәм ағыулы ҡорал эшләү һәм таратыуҙы тыйыу маҡсатында әҙмәәҙлекле сығыш яһай",- тине В.Путин. Был йәһәттән төрлө илдәр араһында хеҙмәттәшлек тиң хоҡуҡлылыҡ нигеҙҙәрендә, бөтөн дәүләттәрҙең суверенлығына ихтирам шарттарында барырға тейеш, тине ул.

Донъя илдәре хәүефһеҙлегенә коронавирустың камиллаштырылған яңы штаммдары, себер түләмәһе, чума, холера һәм башҡа йоғошло сирҙәр йөҙөндә яңы ҡурҡыныстар янай. Тәүге корона пандемияһында миллиондан ашыу халҡын юғалтҡан АҠШ хакимиәте таяҡтың ике башлы икәнен онотоп ебәрә түгелме? Үҙе ҡаҙыған соҡорға үҙе төшөр ҙә ул, тик бында ябай американдарҙың ни ғәйебе? Әйткәндәй, Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы ла ковид менән ҡурҡытып, юҡҡа ғына хәбәр ҡабартмайҙыр, күрәһең, ти эксперттар. Әллә кәрәк, әллә кәрәкмәгән ошо ойошмала ағза булып торған илдәр уның ҡаҙнаһына бик күп иғәнә түләй. Ни өсөн, беҙгә унан ни файҙа - билдәһеҙ, әммә уның аппетиты һаман шаша ғына бара: әле башланмаған-иләнмәгән-һуғылмаған 2024-2025 йылдар өсөн был ойошма Рәсәйҙән генә лә миллиардлап һум аҡса талап итә. Шулай итеп, ковид кемдәр өсөндөр үлемесле сир булһа, уны ойоштороусылар өсөн фәҡәт аҡса һәм байлыҡ сығанағы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

5

# Мәғариф

"Киске Өфө"гәзитенең махсус бите

26 август - 1 сентябрь
(урағай - һарысай)
2023 йыл
№33 (1075)

КӨНАУАЗ

# СЕНТЯБРЬ АЛДЫНАН...

## кәңәшләшеү, фекер алышыу мотлаҡ...



**Ошо йылдың 22 августында Өфөлә баш ҡалабыҙ мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәһенең пленар ултырышы уҙғарылды. Кәңәшмәнең модераторы ролен Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығының гуманитар мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева үтәне. Быйылғы кәңәшмәнең төп темаһы - "Өфө ҡалаһының берҙәм белем биреү арауығы: уҡытыу һәм тәрбиә биреүҙең яңы мөмкинлектәре".**

Әлбиттә, Өфө кеүек ҙур мегаполистың барса педагогтарын ғына түгел, хатта белем биреү ойошмалары етәкселәрен һәм мәғариф менән идара итеү органдары хеҙмәткәрҙәренең барыһын бер юлы йыйып кәңәш ҡороп та булмаҫ ине. Шуға күрә баш ҡала педагогтары өсөн 14 августан 17 августа тиклем август кәңәшмәһе сиктәрендә "Мәғариф аҙналығы" ойошторолдо. Мәғариф системаһы өсөн үтә мөһим булған проблемалар буйынса фекер алышыу маҡсатында уҡыу йорттары базаһында 8 дискуссия майҙансығы эшләне. Уларҙың атамаларынан уҡ аңлашылыуынса, баш ҡалабыҙ мәғрифәтселәре хәҙерге шарттарҙа үтә мөһим булған, уҡытыу-тәрбиә системаһының һөҙөмтәлелеген күтәреү менән бәйле байтаҡ ҡына проблемалар буйынса фекер алышыу мөмкинлегенә эйә булды ошо аҙналыҡта.

Кәңәшмәгә килеүселәр БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайы бинаһының Ҙур залында йыйылды, зал шығырым тулы ине. Кәңәшмә эшендә БР Башлығы Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Искәндәр Әхмәтвәлиев, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Эльвира Айытҡолова, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайы Рәйесе урынбаҫары Рөстәм Ишмөхәмәтов, БР мәғариф министры урынбаҫары Илдар Мәүлетбирҙин, Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев, Өфө ҡала округы Советы рәйесе Марат Васимов, ҡала хакимиәтенең мәғариф идаралығы начальнигы Азат Батыршин ҡатнашты һәм сығыш яһаны.

Искәндәр Әхмәтвәлиев кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға тәбрикләү һүҙендә педагогик хеҙмәткәрҙәрҙең республика кәңәшмәһендә БР Башлығы Радий Хәбировтың мәғариф системаһының төп проблемалары һәм бурыстары хаҡында әйткәндәрен иҫкә төшөрөп, балаларға белем биреүҙең һәм тәрбиә процестарының берҙәмлегенә өлгәшеү зарурлығын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Хәҙерге замандың глобаль проблемалары тыуҙырған яңы талаптар, илебеҙҙәге ижтимағи-сәйәси ситуация балаларҙы һәм йәштәрҙе ватансылыҡ рухында тәрбиәләү мәсьәләһен алғы планға сығара. Шуға күрә республика етәкселеге балалар баҡсаларынан алып юғары уҡыу йорттарына тиклем йәш быуындарҙа патриотизм тойғоһо тәрбиәләүҙең берҙәм системаһын булдырыуҙы көнүҙәк мәсьәлә, тип иҫәпләй.

Эльвира Айытҡолова Өфө педагогтары иғтибарын мәғариф системаһына ҡағылған яңы закондар ҡабул ителеүе айҡанлы дөйөм белем биреү һәм тәрбиә өлкәләрендәге үҙгәрештәргә йүнәлтте. Яңы уҡыу йылында тарих, йәмғиәтте өйрәнеү, рус теле һәм әҙәбиәте, география предметтары бөтөн Рәсәй мәктәптәрендә лә берҙәм стандарт дәреслек буйынса уҡытыласаҡ. Эльвира Айытҡолова мәктәптәрҙә хеҙмәт тәрбиәһенә иғтибарҙы көсәйтеүгә, юғары класс уҡыусылары менән "Хәүефһеҙлек һәм Ватанды һаҡлау нигеҙҙәре" предметы сиктәрендә башланғыс хәрби әҙерлек алып барыуға айырым иғтибар бүлеү зарурлығын белдерҙе. Яңылыҡтарҙан - "Йыл уҡытыусыһы" федераль конкурсында еңеүсене 1 млн һум, ә башҡа һөнәри конкурстарҙа еңеүселәрҙе 200-әр мең һум күләмендә аҡсалата бүләкләү ҡаралған, олимпиадаларҙа ҡатнашыусы уҡыусылар өсөн Менделеев картаһы булдырыласаҡ, күп кенә дөйөм белем биреү учреждениелары педагогик кадрҙарға ҡытлыҡ кисереүе айҡанлы вуз һәм колледждарҙың өлкән курстары студенттарын эшкә алыу законлаштырыла. Дәүләт Думаһы депутаты уҡыусы балаларҙың һаулығын һаҡлау маҡсатында уларҙы тәмәке төтөнө менән ағыуланыуҙан ҡурсалау, вейптар ҡулланыуҙан, уларҙы магазин витриналарында рекламалауҙан, төрлө эсемлектәргә зыянлы тәмләткестәр ҡушыуҙан тыйыу менән бәйле норматив акттар ҡабул ителеүен билдәләп үтте.

Рөстәм Ишмөхәмәтов, Өфө ҡалаһының мәғариф системаһы органдарының, дөйөм урта белем, башланғыс һәм урта һөнәри белем биреү учреждениеларының эшмәкәрлегенә юғары баһа биреп, уларҙың республикабыҙ мәғарифын үҫтереүгә лайыҡлы өлөш индереүен билдәләне. "Республика парламенты депутаттары мәғариф өлкәһенә ҡағылған, уны үҫтереүгә булышлыҡ иткән закондарҙы ваҡытында әҙерләргә һәм ҡабул итергә тырыша", - тине ул. Башҡортостан парламенты рәйесе урынбаҫары педагогтарҙың эш хаҡтарын күтәреү менән бәйле инициативалар буласағы хаҡында ла белдерҙе.

Башҡортостандың мәғариф министры урынбаҫары Илдар Мәүлетбирҙин берҙәм белем биреү арауығын булдырыу һәм камиллаштырыуҙы хәҙерге мәғариф системаһының төп бурысы, тип атаны. Бының өсөн бөтөн шарттар бар: белем биреүҙә федераль стандарттар ҡабул ителгән, барса предметтар буйынса берҙәм уҡыу программалары төҙөлгән, хәҙерге ваҡытта берҙәм дәреслектәр әҙерләнә һәм Рәсәй төбәктәре улар менән мотлаҡ тәьмин ителәсәк. "Беҙҙең республика 10-11-се класс уҡыусыларына тарих предметы буйынса берҙәм дәреслектәр һатып алыу өсөн 51 млн һум аҡса бүлде лә инде, 1 сентябргә тиклем тейешле дәреслектәр барса мәктәптәргә лә ҡайтарыласаҡ", - тине мәғариф министры урынбаҫары. Ул шулай уҡ мәктәптәрҙә берҙәм һөнәри ориентация системаһын йәйгә һалыу мәсьәләһенә айырым иғтибар бүлеү зарурлығын белдерҙе. Һәр кесаҙнала дәрестәрҙән һуң бер сәғәтлек һөнәри ориентация занятиеларын уҙғарыу мотлаҡ. Ҡабул ителгән моделгә ярашлы, мәктәптәр ике төркөмгә бүленгән: һөнәри ориентацияны база кимәлендә һәм юғары кимәлдә ғәмәлгә ашырыусы уҡыу йорттары. Һуңғылары уҡыусыларҙы улар үҙләштерә алырлыҡ һөнәрҙәргә өйрәтергә тейеш. Әлегә республикала ошондай 50 мәктәп булдырыу ҡаралған. Һөнәри белем биреү йәһәтенән предприятиелар базаһында яңы уҡыу үҙәктәрен асыу ҡарала. Ошондай етештереү-уҡыу үҙәге Ростех тарафынан Өфө моторҙар етештереү берекмәһендә (УМПО) 2019 йылда асылғайны, ул әле лә уңышлы эшләп килә. Мәғариф системаһында күп кенә предметтар буйынса педагогтар етешмәй, шуға күрә уҡыусыларҙы уҡытыусы-тәрбиәсе һөнәренә ылыҡтырыу маҡсатында педагогия колледждары нигеҙендә педагогика кластерын булдырыу күҙаллана.

Ҡала хакимиәте етәксеһе Ратмир Мәүлиев мәктәптәрҙә тәрбиәүи эштәргә иғтибарҙы көсәйтеүҙең ыңғай күренеш булыуын билдәләп, уҡыусыларҙа патриотизм һәм граждандыҡ сифаттарын тәрбиәләүҙең өҫтөнлөклө бурыс икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Мәктәптәрҙә директорҙың тәрбиә эштәре буйынса кәңәшсеһе вазифаһы булдырылды, ҡала хакимиәте уларҙы әҙерләү буйынса һөҙөмтәле эшләнә. Ҡаланың 126 мәктәбендә яңы уҡыу йылында 137 мең бала уҡыясаҡ, уларҙың 15 меңе - беренсе класс уҡыусылары. Бар мәктәптәрҙә лә Рәсәй балалар һәм йәштәр хәрәкәтенең беренсел ойошмалары асылды, "Беренселәр хәрәкәте"нең грант конкурсында еңеүсе Өфө командаһына бирелгән 13 млн һум аҡса тәрбиәүи эштәр өсөн файҙаланыласаҡ.

Билдәләнеүенсә, белем биреүҙең сифаты буйынса күрһәткестәр ҡәнәғәтләнерлек: уҡыусыларҙың Бөтөн Рәсәй олимпиадаһында 21 уҡыусы еңеү яуланы; 29 сығарылыш класс уҡыусыларының белеме БДИ һөҙөмтәләре буйынса 100 балға баһаланды; уларҙан 589 уҡыусы мәктәпте алтын миҙалға тамамланы. Балаларға өҫтәлмә белем биреү өсөн буш торған муниципаль биналар ремонтлана, былтыр декабрь айында Киров районында "Таланттар ҡалаһы" исемле Үҫеш һәм ижад үҙәге эшләй башлаһа, үткән аҙнала Совет районында "Техно Глобус" һәм "Арт-Дружный" тип аталған объекттар асылды. Был тағы ла 1500 балаға өҫтәлмә белем биреү мөмкинлеген бирә.

Ҡала хакимиәте Рәсәй мәғариф министрлығына ҡаланың 70 белем биреү объектын ремонтлау һәм йыһазландырыу өсөн федераль программа буйынса 7 млрд һумлыҡ финанс ярҙамына заявка бирҙе. Ҡала бюджетынан быйыл ремонт эштәренә 90 миллион һумдан күберәк аҡса бүленде. "Инорс-4" микрорайонында республика бюджеты иҫәбенә Волга буйы федераль округында 1650 урынлыҡ иң ҙур мәктәп сафҡа индерелде. Әле баш ҡалала 8325 урынлыҡ 6 яңы мәктәп төҙөлә. Концессия шарттарында Затон-Восточный микрорайонында 1225 урынлыҡ һәм Дим-6, Глумилино-2 һәм Миловская урамында барлығы 3675 урынға иҫәпләнгән 3 мәктәп, тағы ла бюджет кредиттары иҫәбенә Кузнецов Затонында 2200 урынлыҡ мәктәп төҙөләсәк.

Ҡала хакимиәте башлығы, мәктәптәрҙә айырым предметтар буйынса уҡытыусылар етешмәүен иҫәпкә алып, йәш кадрҙарҙы йәлеп итеү буйынса махсус комиссия булдырылыуы хаҡында белдерҙе. Алдағы уҡыу йылына Өфө мәктәптәрендә 146 йәш уҡытыусы эшләй башлаясаҡ, йәнә баш ҡаланан 84 кеше маҡсатлы йүнәлтмә менән педагогик уҡыу йорттарына уҡырға ебәрелгән.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Мәғариф хеҙмәткәрҙәренең август кәңәшмәләрендә әйтелгәндәрҙән сығып, илдә берҙәм мәғариф вертикале төҙөлөүенең хәл ителгән мәсьәлә икәненә төшөнөп була. Әлбиттә, был элекке совет белем һәм тәрбиә биреү системаһын хәтерләтә. Бындай вертикалдең ыңғай яҡтары күп, сөнки барыһы ла аныҡ структуралы система талаптарына ярашлы эшләйәсәк. Маҡсаттар, стандарттар, уҡыу пландары, программалар, дәреслектәр берлеге педагог эшмәкәрлеген билдәле бер рамка-ситлектәр эсендә ғәмәлгә ашырыу мөмкинлеген бирә. Тик шуныһы: ошо мәғариф вертикале дидактикала, уҡытыу методикаларында, тәрбиә эштәрендә уҡытыусының ижади мөмкинлектәренә, яңы алымдар ҡулланыуына кәртә булмаһын ине. Педагогикаға, ғөмүмән, мәғариф өлкәһенә былай ҙа эске консервативлыҡ хас, ә новацияларҙың тормошобоҙҙоң барса өлкәләрендә лә йылдамыраҡ алға барыу мөмкин булмауын да онотмаһаҡ ине.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*✓ Әгәр ҙә элекке кеүек һәр абитуриент уҡыу йортона барып имтихандар тапшыра башлаһа, был коррупцияға юл асасаҡ. Ул саҡта белем түгел, ә танышлыҡ тәүге урынға сығасаҡ.*



КӨНҮҘӘК ӘҢГӘМӘ

**Мәктәп тамамлаған йәштәрҙең киләсәккә юлы һалынған мәлендә, июль башынан Өфөлә Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларына уҡырға инергә теләгән абитуриенттар өсөн ярҙам итеү штабы эшләне. Мәскәүҙәге һәм Санкт-Петербургтағы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы ("BashStudents!") абитуриенттарҙы ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға яуаптар бирҙе, уҡыу йорттары тураһында тәпләм мәғлүмәттәр менән бүлеште, уҡырға инеүгә, белем алыуға, ҙур ҡалала йәшәүгә бәйле мәсьәләләргә асыҡлыҡ индерҙе. 2008 йылдан эшләп килгән Ассоциацияны бөгөн Мәскәүҙең 49-сы мәктәбендә бүлек етәксеһе булып эшләгән Илшат РӘХМӘТУЛЛИН етәкләй. Уның менән әңгәмәбеҙҙә Ассоциация эшмәкәрлеге тураһындағы мәғлүмәттән тыш, дөйөм йәштәр донъяһына ла байҡау яһалды.**

# ҠАЙҺЫ ТАРАФТА ЙӘШӘҺӘ ЛӘ...

## Башҡортостан илһөйәре булһын йәштәребеҙ




**▸ Һүҙебеҙҙе Ассоциация эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәттән башлайыҡ.**

- Беҙҙең егеттәр һәм ҡыҙҙарҙың Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек илебеҙҙең ҙур ҡалаларының тормош мәктәбен үтеүе уларҙың киләсәгендә мөһим роль уйнай. Ассоциация ошо ҡалаларҙа уҡыу мәлендә йәшәгән йәштәрҙең ныҡлы ҡалҡаны, ышаныслы терәге булып тора. Абитуриент саҡтарынан алып, юғары уҡыу йортон тамамлап сыҡҡандарына хәтлем беҙ уларҙы ярҙамға булабыҙ, төрлөсә ярҙам күрһәтәбеҙ. Кәрәк булғанда, уҡырға ингәндәргә ятаҡ мәсьәләһен хәл итергә лә ярҙамлашабыҙ.

Йәйгеһен абитуриенттар, уларҙың ата-әсәләре менән республикала эшләнәк, уҡыу йылы башланғас, Мәскәү һәм Санкт-Петербургка яңы килгән егет һәм ҡыҙҙарҙы бергә туплап, улар өсөн төрлө саралар уҙғарабыҙ. Улар араһында спорт, мәҙәни һәм, әлбиттә, белем өлкәһенә ҡағылышлы сараларҙы билдәләп үтергә була. Шуны әйтеп үткем килә - ниндәй сара үткәрһәк тә, уның нигеҙенә үҙебеҙҙең республикаға, илебеҙгә ҡарата илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләү һалынған. Башҡортостандан ситтә булһалар ҙа, республика улар менән бергә икәнлеген тойоп йәшәргә тейеш йәштәребеҙ. Шуға күрә уҙғарған сараларыбыҙҙы ла ошо юҫыҡта ойошторорға тырышабыҙ. Башҡортостандан килгән йәштәр туған телдә иркенләп һөйләшһен өсөн сараларҙың күбеһен башҡорт телендә үткәрәбеҙ.

Шулай уҡ йәштәрҙең танышып, үҙ-ара аралашып йәшәүҙәрен, уҡыу менән бер рәттән, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашыуын тәьмин итеү ҙә үҙебеҙгә алған бурыстар. Уҡып бөткәс тә Ассоциация ағзалары менән тығыҙ бәйләнештә булабыҙ, эш урыны табыу буйынса ла ярҙам күрһәтәбеҙ.

**▸ Бөгөнгө көндә илһөйәрлек темаһы бик актуаль. Әйтеүегеҙсә, ассоциация эшмәкәрлегендә лә илһөйәрлеккә ҙур урын бирелә?**

- Ысынлап та, илһөйәрлек тураһында бөгөн бик күп һөйләйҙәр, баланы тәрбиәләгәндә беренсе урынға ҡуйыуға баҫым яһайҙар. Ләкин шуны әйткем килә: илһөйәрлек хәҙер генә ҡалҡып сыҡманы, был тойғоно тәрбиәләүгә электән ҙур иғтибар бирелде.

Миненсә, илһөйәр булыу мотлаҡ үҙең тыуып үҫкән ауылда, республикала йәшәүҙе аңлатмай. Ҡайҙа йәшәүеңә ҡарамаҫтан, тыуған ереңде яратыу һәм уның үҫешенә хәләлдән килгән тиклем үҙ көсөңдө һалыу ҙа илһөйәрлеккә инә. Туған телеңде белеү һәм уны балаларыңа өйрәтеү, халҡыңдың йолаларын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен онотмау шулай уҡ илһөйәрлек билдәһе. Һәм быныңөсөн, билдәләп үтеүемсә, мотлаҡ Башҡортостанда йәшәү мөһим түгел.

Башҡортостандан сит төбәктәргә, Мәскәү һәм Санкт-Петербург ҡалаларында дәрәжәле уҡыу йорттарын тамамлап, үҙҙәренең һөнәри эшмәкәрлеген илебеҙ, шул иҫәптән республикабыҙ мәнфәғәте өсөн йүнәлтеүселәрҙе илһөйәр түгел тип әйтергә тел әйләнмәй. Беҙҙең илебеҙ ҙур - ул Рәсәй, бәләкәй тыуған илебеҙ - Башҡортостан. Ошо меңәр саҡрымдарға һуҙылған илебеҙҙең ҡайһы төбәгендә йәшәһәк тә, кәрәкле һәм файҙалы эштәр башҡарып йәшәһәк, тимәк, беҙ илһөйәрҙәр.

**▸ Һеҙ йәштәр менән тығыҙ бәйләнештә эшләйһегеҙ. Уларҙың көнкүрешендә илһөйәрлек тойғоһо бармы?**

- Республиканан ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙ бик күп. Уларҙың һанын йыл һайын Башҡортостандан уҡырға, эшләргә тип сығып киткән йәштәребеҙ тағы ла тулыландыра. Миҫал өсөн, беҙҙең Ассоциация ағзалары булған йәштәрҙә күҙ уңында тотоп һүҙ йөрөткәндә, уларҙың һәр береһе тыуып үҫкән ерен, республикаһын яратҡан кешеләр. Үҙенең бихисап мөмкинлектәре менән әйҙәп, төрлө өлкәгә ҡағылышлы шөғөлдәрен тәҡдим иткән, әллә күпме дуҫтар булдырырға мөмкинлек биргән ҙур ҡалаларҙа йәшәп тә, үҙ милләттәштәре, Башҡортостандан сыҡҡандар менән аралашыуҙы әҙәләп килеүселәрҙе берләштерә Ассоциация. Уларҙың һәр береһенең йөрәгендә илһөйәрлеккә ҙур урын бүленгән, тип ышаныслы әйтә алам. Туған телдә аралашыу, йыр-моң тыңлау, шатлыҡ һәм борсолоуҙары менән уртаҡлашыу өсөн улар бер урынға тупланыр утрау эҙләй. Был үҙе үк илһөйәрлек тураһында һөйләй.

Мәскәүҙә уҡып йөрөүсе студенттар араһында ла күптәр эш урыны итеп Башҡортостанды күрергә теләй. Хатта оҙаҡ йылдар баш ҡалала йәшәп, инде тормошта үҙ урындарын тапҡандар араһында ла республикаға ҡайтып эшләргә теләүселәр бар. Тимәк, илһөйәрлек кешенең йәшенә бәйләнмәгән, ул йә бар, йә юҡ.

**▸ Йәштәрҙең дөйөм тәрбиәһе тураһында нимә әйтерһегеҙ? Ғәҙәттә, оло быуын вәкилдәре араһында йәштәрҙе әрләргә яратыусылар бар, уларҙы ялҡаулыҡта, тәрбиәһеҙлектә ғәйепләгәндәр ҙә әҙ түгел...**

- Йәшлек - хистәр, тойғолар, хыялдар мәле. Йәштәр, күбеһенең, нәҡ ошо тойғолар сорналышында йәшәй һәм башҡарған ғәмәлдәре лә күңел талабына бойһона. Әлбиттә, йәштәрҙең араһында ла төрләләре бар: тәрбиә кимәле юғары булғандары ла, тәрбиә етмәгәндәре лә. Айырым бер кешене йәки ниндәйҙер төркөмдө күҙ алдына баҫтырып, тотош йәштәр тураһында һүҙ йөрөтөү урынһыҙ. Насар милләт булмай, алама кешеләр генә була, тигәнде үҙгәртеп әйткәндә: "Йәштәр насар, тәрбиәһеҙ түгел, ләкин уларҙың араһында тәрбиә етмәгәндәре бар".

Беҙҙең замандағы йәштәрҙән бөгөнгө заман йәш кешеләре тәрбиәүи йәһәттән әллә ни айырылмай. Ә нимә менән айырыла? Хәҙерге йәштәр алдынғыраҡ ҡарашлы, замандың төрлө хәл-ваҡиғаларын тиҙ төшөнөп, уға яраҡлаша ала, тиҙ уйлайҙар, етеҙҙәр.

Йәштәрҙе тотошлайы менән ялҡаулыҡта ла ғәйепләй алмайым. Тирә-яҡҡа күҙ һалғанда, мәктәп йәшендәге балалар араһында ла йүгереп йөрөп аҡса эшләгәндәр күп, шул уҡ ваҡытта 40 йәшкә етеп тә атаәсәһе елкәһендә йәшәгәндәр етерлек. Бәлки, элек баҫыу тулып эшләп йөрөүҙәр, фермаларҙа, ырҙындарҙа тауыштарҙың гөрләп тороуына өйрәнгән оло быуын кешеләренә күберәгән офистарҙа, интернетта аҡса эшләүсе йәштәр ялҡау тойолалыр. Ләкин һәр замандың үҙ ҡалыбы - быны инҡар итергә түгел, ә ҡабул итергә кәрәк.

Интернеттың киң таралыуы балаларҙың, йәштәрҙең тәрбиәһендә ҙур роль уйнай. Был тенденцияны бөтөнләй юҡ итеп булмай, шуға күрә был тәрбиәнең дөрөҫ йүнәлештә булыуын контролдә тотоу кәрәк. Рәсәй Мәғариф министрлығы тарафынан "15 йәшкә тиклем балаларға интернетты сикләү тураһында" тәҡдим дә булған ине. Был тәҡдимде күптәр ҡуш ҡуллап күтәреп алыр ине, тип уйлайым.

**▸ Мәғариф өлкәһендә эшләүегеҙҙе күҙ уңында тотоп, Берҙәм дәүләт имтиханы тураһындағы фекерегеҙ ниндәй?**

- Берҙәм дәүләт имтиханына ҡарата ике төрлө ҡараштамын. Ҡайһы бер бик һәләтле балалар ҙа имтиханда кәрәкле минималь мәрәйҙәрҙе йыя алмайынса, уларҙың киләсәккә булған бөтә пландары боҙола. Икенсе яҡтан сығып ҡарағанда, Берҙәм дәүләт имтиханы бөтә абитуриенттарға ла берҙәй мөмкинлек бирә. Әгәр ҙә БДИ-ны уңышлы тапшырһалар, әллә ҡайҙағы төпкөл ауылда йәшәгән сығарылыш уҡыусыһы ла интернет аша илдең төрлө уҡыу йорттарына документтарын тапшырып, уҡырға инеп китә ала.

Тағы ла шуныһы: әгәр ҙә элекке кеүек һәр абитуриент уҡыу йортона барып имтихандар тапшыра башлаһа, был коррупцияға юл асасаҡ. Ул саҡта белем түгел, ә танышлыҡ тәүге урынға сығасаҡ. Ә хәҙерге ваҡытта, БДИ һөҙөмтәләре менән уҡырға ингәндә, бындай ғәҙелһеҙлеккә урын юҡ. Һәр кем үҙенең белемен файҙаланып ҡына уҡырға инә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тыуған йортонан, ауылынан ситкә сығып киткән һәр кемгә таяныс кәрәк. Ә ҙур тормоштоң ишеген Мәскәү кеүек ҙур ҡалаларҙа асып инеүселәр өсөн был айырыуса көнүҙәк мәсьәлә. Йәштәргә бөгөн бөтә яҡлап юлдар асыҡ, ә Ассоциация кеүек ойошмаларҙың булыуы уларға төрлө яҡлап үҫешергә мөмкинлектәр бирә. "Ҡайҙа барһаң, дуҫ-иш кәрәк, ҡаршы сығып атың бәйләргә" тигән йыр юлдары көнүҙәк булыуҙан бер ҡасан да туҡтамай, шуға күрә йәштәребеҙҙе берләштереүсе, ярҙам ҡулы һуҙыусы һәм бөтә яҡлап та терәк булыусы Мәскәүҙәге һәм Санкт-Петербургтағы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһына ("BashStudents!") оҙайлы эшмәкәрлек насип булһын.**

Гөлназ МАНАПОВА
әңгәмәләште.

✓ *Һуғыш мәлендә дошманды алдау, бәхәстә булған кешеләрҙе яраштырыу маҡсаты менән алдаштырыу һәм ҡатыныңа комплимент өсөн бигүк дөрөҫлеккә тап килмәгән һүҙҙәр әйтеү Бәйғәмбәребеҙ тарафынан рөхсәт ителгән.*



# БАЛАЛАРҘЫ...

## ошаҡлашырға өйрәтеү яҡшымы?

**Был ҡатмарлы тормошта әҙәм балаһы йыш ҡына берәй сетерекле һорау алдына килеп баҫа. Бәғзе мәл, ниндәйҙер күренештең яҡшымы, әллә, киреһенсә, насармы икәнен белеп тә булмаҫҡа мөмкин. Ә шулай ҙа...**



Совхоз үҙәгенең ун йыллыҡ мәктәбенә яҡын тирәләге дүрт ауылдан уҡырға йөрөй торғайныҡ. Бишенсе синыфтан алып. Ҡышын дөйөм ятаҡта йәшәнек. Сираттағы каникулдар килеп етеп, ауылдарыбыҙға таралышыр алдынан, берәй класты "дежур" итеп тәғәйенләп, мәктәп администрацияһы уға бурыс ҡуя. Ял көндәрендә үҙ ауылында йәшәгән башҡа синыф балаларын "контролдә" тоторға тейеш булған был дежурныйҙарға ҡуйылған талап ярайһы ғына юғары: һәр тәртип боҙоу осрағы "ҡәләмгә алынырға" тейешле. Каникулдар тамамланып, балалар ҡабаттан уҡыуға йыйылғас, тәүге көн мотлаҡ үткәрелгән "линейкала" дежур кластар бөтә мәктәп алдында үҙҙәренең ауылындағы хәлдәр хаҡында "отчет" бирә... Тәү ҡарауҙа был - мәктәп балаларына ҡарата ифрат уңай бер тәрбиәүи ысул һымаҡ, шулай бит? Әлеге "дежур" булып туғыҙынсы-унынсы синыф уҡыусылары торған булһа, уларҙан, ғәҙәттә, "ауылыбыҙҙа каникул ваҡытында бер ниндәй ҙә тәртип боҙоу булманы" тигән доклад ишетәһең. Әммә... хәйләнең ни икәнен белмәгән бер ҡатлы, эскерһеҙ (сабыйҙар тип әйтәйек) бишенсе, алтынсы класс балаларының докладын ишетеү, бәғзе ваҡыт, ғәйәт уңайһыҙ була торғайны. Уҡытыусы ағай һәм апайҙарҙың һәр һүҙен күңел биреп үтәүсе был балалар үҙ ауылында ни күргәнен һис йәшермәй һөйләп бирә...

Ҡышҡы каникулдан килгәс, бишенсе синыфта уҡыған күрше ауыл ҡыҙының бер килке ауылдашын уҡытыусыларға "һатҡаны" хәтеремдә. Бөтә мәктәп алдында (хатта исемдәрен дә атап) бер нисә өлкән синыф апайҙарының яңы йылды "ололарса" ҡаршылауы хаҡында ла әйтеп һалды был ҡыҙый. Мин дә әле ул саҡта бәләкәй инем, әммә уның һүҙҙәрен ишеткәс, "тәндәрем сымырҙап" киткәнен иҫләйем. Был дежур ҡыҙ өсөн уңайһыҙланып, уны нығ ҡына йәлләп торҙом. Минән арттараҡ торған туғыҙынсы синфтағы бер ағай ишетелер-ишетелмәҫ итеп: "Ныу был ҡыҙыҡай хәҙер ауылдаштарынан "күрәген" ала инде", - тип әйткәс, линейкаға теҙелгән балаларҙың ҡайһы берәүҙәре пырхылдап көләп тә ебәрҙе. Әммә был ағайҙың шаяртып ҡына әйткән һүҙҙәренән мин тағы ла нығыраҡ борсолдом. "Докладсы" ҡыҙға "ғәйепләнеүселәрҙең" аҙаҡ ниндәйерәк формала ризаһыҙлыҡ белдерәсәген күҙалланым...

Тағы бер миҫал. Шул уҡ мәктәптә уҡытыусыларҙың береһе балаларҙы "мөйөшкә" баҫтырып ҡуйырға ярата торғайны. Ҡыҙҙарға ундай ҡурҡыныс янамай, улар тәртипле, ә бына малай халҡы шытып сығып ҡына бара бит, ауыҙына... май булғыры! Бер көн, был ағайҙың кәйефе артыҡ боҙоҡ булдымы, дәрес аҙағына ҡарай кластағы барса малайҙар тиерлек стенаға ҡарап, баҫып тора инек (дүрт мөйөш барыбыҙға ла етмәне). Синыфта иң тәртипле балаларҙың береһе тип һаналыуыма ҡарамаҫтан, минең өсөн дә ташлама булманы. Парталаш малайға бышылдап һүҙ ҡушҡаным өсөнмө, миңә лә түңәрәк мейес артынан урын табылды. Уҡытыусының язаһынан бер Әхсән генә (исеме үҙгәртелде) "имен" ҡалды.

Был хәлдең иң ҡыҙығы алда ине әле. Ағайыбыҙ шул "өлгөлө" малайҙың ҡулына үҙенең указкаһын тоттороп, беҙҙе "һаҡлап" йөрөргә ҡушты. "Берәү урынынан ҡуҙғалһа, мин ингәс, әйтерһең", - тине лә, үҙе тышҡа сығып китте. Уҡытыусы һынлы уҡытыусы "власть" биргәс, теге малай, ысынлап та, иркенләп китмәһенме! Берәйебеҙ артыбыҙға боролоп ҡарағанды күреп ҡала ла, шунда уҡ килеп, арҡаға указка менән төртөп ала. Икенсебеҙҙең башына эләгә әлеге ағас таяҡ... Тик, дәрестәр тамамланып, өйҙәргә таралышыр алдынан, уҡытыусы күрмәгәндә, әлеге Әхсәнде малайҙар эткесләп-төрткөсләп тигәндәй, илатып та ҡуйҙылар. "Кемдең кем икәнлеген белергә теләһәң, уның ҡулына власть бир", тигән әйтемде ишеткәнем бар. Әммә уны бала кеше өсөн ҡулланыу урынлы булмаҫ тип уйлайым. Бында төп "бола башлығы" - балаларҙың бер-береһенең "баштарын төкөштөрөүсе" әлеге уҡытыусы ағай тип һанайым. Дәрестән һуң Әхсәндең башҡа балаларға үпкәләп илағаны һаман күҙ алдымда тора. Ошо көнгәсә уны йәлләп иҫкә алам.

Берәй нәмә хаҡында һөйләгәндә, "честное пионерское слово" тип әйтеү ғәҙәте булған осор ҙа ололарҙың хәтерендәлер. Булған хәл тураһында "уәллаһи" тип ант иткән мосолман кешеһенә ышаныу тейешле булған кеүек, әлеге пионер һүҙен дә "изге" итеп һанарға өйрәттеләр шул беҙҙе. Балалар өсөн ҡуйылған кинофильмдарҙа ла ошо һүҙбәйләнеште йыш ҡына ҡулланғылайҙар ине. Бәләкәйҙәр үҙҙәре уйлап сығармаған, ә ололарҙан сыҡҡан һүҙ бит инде ул. Ҙур кешеләр тарафынан һалынған шундай нәмәләр сабыйҙың аңына һис шикһеҙ "һеңеп тә ҡуя". Тәрбиә эшендә уҡытыусы ағай һәм апайҙарҙың роле ғәйәт ҙур тиеүем, уларҙың әйткән һәр һүҙен бала кеше "хаҡ" тип ҡабул итә. Бик тә яҡшы һүҙ был "честное...", әммә һәр осраҡта ла микән?

Ошо турала уйлана башлаһам, нишләптер, гел генә герой-пионер Павлик Морозов иҫемә төшә. Мәктәп йылдары беҙгә уны үрнәк итеп ҡуялар ине. "Продотрядтарҙан игенен йәшергән үҙенең "кулак" олатаһын - "халыҡ дошманын" фаш итеп, шул арҡала батырҙарса һәләк булған герой-пионер Павлик Морозов һымаҡ тоғро булырға беҙҙе өйрәттеләр. Бөтә Союз пионер ойошмаһы уның исемен йөрттө. Хәҙер йыш ҡына ошо хаҡта ла фекерләп алам. Ошаҡ өсөн үлтерелгән шул малайҙы йәлләйем. Балалары астан үлмәһен өсөн бойҙай йәшереп ҡуйған ата-олаталары ла, әлбиттә, язаһыҙ ҡалмай: властар тарафынан ҡулға алынып, атыуға хөкөм ителә. Тик унан бер кемгә лә еңелерәк түгел шул: нәтижәлә - бөтөнләйгә бер ғаилә һәләк була!.. Күрше-күршеһен, туған-туғанын ошаҡлау арҡала һәләк булған меңәрләгән ата-бабаларыбыҙ ҙа тап ана шул осорҙағы золом ҡорбандары бит инде.

*Ә ошаҡсы малайҙарҙы бер ҡасан да, беребеҙ ҙә яратманыҡ. Ундайҙарҙы "ошаҡ тоҡсайы" тип үртәй торғайныҡ. Өйөбөҙҙә иң "баш тәрбиәсе" булған атайым да был мәсьәләгә үҙенсә ҡараны. Ғаиләлә беҙ дүрт малай үҫтек. Малай кешеләрҙе белеп тораһығыҙ бит инде, бәғзе ваҡыт уларҙың сәкәләшеп тә китеүе бар. Әммә, шул айҡанлы беребеҙ икенсебеҙ өҫтөнән атайыма ошаҡлашыуҙан ҡурҡа инек, сөнки ул быны бер ҡасан да хупламаны. Ошаҡ ишетеп ҡалһа, ике яҡҡа ла "тигеҙ әләгә" торғайны. Өрләктә эленеп торған "аҡыл сыбығы" йыш ҡына беҙҙең бәхәсте ғәҙел хәл иткеләне. Кинәт кенә "таж баҡырып" илап алабыҙ, әммә бер нисә минуттан, бәхәс хаҡында бөтөнләйгә онотоп, "һин дә мин" уйнай ҙа башлайбыҙ...*

Бөгөнгөнән бөтөнләйгә башҡа булған, илдәге барса халыҡҡа үтә ҡаты талаптар ҡуйылған шундай сәйәсәт еле совет ҡоролошо дәүерен һәр саҡ оҙата килгән булһа кәрәк. Тик ул осорҙары уҡытыусылар тарафынан нәҡ ана шулай балаларҙы ла бер-береһенә ҡаршы көйләү алымын ҡулланыуҙың берәй ыңғай яғы булдымы икән, тип икеләнеүем. Бындай тәрбиәүи ысул һис кенә лә яҡшыға алып бармағандыр, минеңсә. Бәлки, ул саҡтағы педагогтарҙан да быны талап итмәгәндәрҙер. Тик әлеге ҡайһы берәүҙәр үҙешмәкәрлек менән булғандыр, моғайын. Үҙем уҡытыусы һөнәренән бөтөнләйгә алыҫ торған кешемен. Әммә бөгөнгө мәктәптәрҙәге тәрән, профессиональ белемле педагогтарыбыҙ ундай иҫке алымдарҙы ҡулланмайҙыр, тигән инаныуҙамын.

Ә ошаҡсы малайҙарҙы бер ҡасан да, беребеҙ ҙә яратманыҡ. Ундайҙарҙы "ошаҡ тоҡсайы" тип үртәй торғайныҡ. Өйөбөҙҙә иң "баш тәрбиәсе" булған атайым да был мәсьәләгә үҙенсә ҡараны. Ғаиләлә беҙ дүрт малай үҫтек. Малай кешеләрҙе белеп тораһығыҙ бит инде, бәғзе ваҡыт уларҙың сәкәләшеп тә китеүе бар. Әммә, шул айҡанлы беребеҙ икенсебеҙ өҫтөнән атайыма ошаҡлашыуҙан ҡурҡа инек, сөнки ул быны бер ҡасан да хупламаны. Ошаҡ ишетеп ҡалһа, ике яҡҡа ла "тигеҙ әләгә" торғайны. Өрләктә эленеп торған "аҡыл сыбығы" йыш ҡына беҙҙең бәхәсте ғәҙел хәл иткеләне. Кинәт кенә "таж баҡырып" илап алабыҙ, әммә бер нисә минуттан, бәхәс хаҡында бөтөнләйгә онотоп, "һин дә мин" уйнай ҙа башлайбыҙ... Шулай уҡ урамда башҡа малайҙар (хатта ҙурыраҡтар ҙа) ҡыйырһытҡан осраҡтарҙа ла атайыма ошаҡлашыуҙан тыйылдыҡ. Сөнки был юлы ла атайыбыҙҙан тик үҙебеҙгә генә "тамаҫағын" яҡшы белә инек. Уның беҙҙе яҡлашып, сит кеше балаһына ҡағылып йөрөү ғәҙәте булманы. Кемдә нисек, әммә беҙҙең ғаиләлә "әҙәм балалары менән бер ҡасан да ыҙғышып йөрөмәгеҙ" тигән принциптағы атайыбыҙҙың тәрбиәһе ана шундай формала ине (Ошо хаҡта гәзитебеҙҙә башҡаларҙың да фекере булыр әле, моғайын).

Ислам ҡанундарына ярашлы, кешеләрҙе (хатта сабый балаларҙы ла) алдау ярамай. Өс осраҡтан тыш. Һуғыш мәлендә дошманды алдау, бәхәстә булған кешеләрҙе яраштырыу маҡсаты менән алдаштырыу һәм ҡатыныңа (иренә) комплимент өсөн бигүк дөрөҫлөккә тап килмәгән һүҙҙәр әйтеү Бәйғәмбәребеҙ тарафынан рөхсәт ителгән. Ә бына ошаҡлашыуҙы динебеҙ тыя. Аллаһ илсеһенең: "Ошаҡсы йәннәткә инмәҫ",- тигән мәғәнәле сахих хәҙисен (Әл Мөслим, Әл Бухари) белеү зыян итмәҫ. "Һүҙ ташыусы (ғәйбәтсе) һәм ошаҡсы - арағыҙҙа иң яманы" тигән риүәйәт тә бар. Берәй кешенең яңылышлығын күреп ҡалған хәлдә, был хаҡта башҡалар алдында уның "йөҙөн йыртмай" ғына, шәхсән үҙенә әйтеп, хатаһын төҙәтеп ебәреү кәрәк, ә ҡайсаҡ хатта бөтөнләйгә өндәшмәй ҡалыу ҙа хәйерле. Әгәр башҡаларға ғибрәт өсөн берәүҙең гонаһ эшен мотлаҡ бәйән итергә кәрәк булһа, ғәйепле кешенең исемен дә атамай һәм уның кем икәнлеген бүтәндәргә белдермәйенсә, "ҡайҙалыр берәү шул-шул эш менән булышҡан" тигәнерәк формала һөйләү яҡшыраҡ. (Был осраҡта һүҙ ниндәйҙер бер ауыр енәйәт эшен фашлау-фашламау хаҡында бармай, әлбиттә. Уныһы - айырым тема). Шул талаптарҙы аңлау һәм тормошта дөрөҫ ҡулланыу өсөн Аллаһы Тәғәлә әҙәм балаһына фекер йөрөтөү һәләтлеге биргән. Бына шулай, ҡәҙерле милләттәштәр, бер-беребеҙгә тик яҡшы ғына мөғәмәләлә булырға тырышайыҡ, тормошобоҙ ҙа матурыраҡ булыр.

Һүҙ аҙағында. Иң башта иҫкә алған ауыл мәктәбендәге балаларҙың бер-береһен ошаҡлашыуының берәй файҙаһы булдымы-юҡмы, был хаҡта ниҙер әйтеү ауыр. Тик апайҙарын ошаҡлаған әлеге ҡыҙый үҫеп еткәс, ҡаты алкоголизм сиренә һабышҡаны, ә "ошаҡланған" ике апайҙың береһе - уңышлы эшҡыуар, икенсеһе өлгөлө хужабикә булып китеүе хаҡында хәбәрҙармын. Тормош тигән нәмә ғәйәт ҡатмарлы шул...

**Мөхәммәт ВӘЛИЕВ.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# БАЛАҢ МЕНӘН...

## туған телдә һөйләш

**Йәш атай-әсәйҙәр, бигерәк тә ҡала ерендәгеләр, балалары менән туған телендә күберәк аралашһын ине. Юғиһә, бынан 7-8 йыл элек самаһы мәктәпкә килгән балалар башҡортса камил һөйләшмәһә лә, аңлай ине, хәҙер бөтөнләй белмәйҙәр. Был ата-әсәләрҙең бала телде мәктәпкә баргас, дәрестә өйрәнер, тигән фекеренә лә бәйлелер, бәлки. Әлбиттә, үҙе лә туған телде яҡшы белмәгән йәш ата-әсәнең өйҙә балаһы менән һөйләшергә теләп тә килеп сыҡмауы бар. Был осраҡта өлкәндәр, тәү сиратта олатай һәм өләсәй, ейән-ейәнсәрҙәре менән телдәрен вата-емерә русса һөйләшмәһен ине.**

Бала төрлө гаджеттарға, телевизорға йыш әүрәгән осраҡта ла мәсьәләне хәл итеү юлдары бар: телефонға махсус ҡушымталар, уйындар, башҡортса тапшырыуҙар һәм әкиәттәр туплаған социаль селтәрҙәрҙәге махсус каналдар яйлап күбәйә башланы. Мәҫәлән, "Балалар" тигән платформаның йәнһүрәттәре, махсус ҡушымталары бик оҡшай беренсе класс уҡыусыларына. "IQ БалаБаш", "Әлләсе" ҡушымталары ла ҡыҙыҡлы бәләкәстәргә. Ғөмүмән, телде өйрәнергә, өйрәтергә теләгәндәргә шарттар булдырылған бит беҙҙә. Мәғариф учреждениеларында ла башҡортса әсбаптар, ҡулланыу материалдары етерлек, тик ата-әсәнең һәм педагогтың көс һалырға теләге генә булһын.

Бөтә тел уҡытыусыларын борсоуға һалған тағы бер күренеш: еңел мәғлүмәт табып өйрәнгән замана балалары китап уҡыу, уйланыу, анализлауҙы онотоп бара. Ҡайһы саҡ коллегалар менән: "Их, бер нисә йылға кире ҡайтып, элекке сығарылыш уҡыусылары менән ошо әҫәрҙең төбөнә төшөп анализлаһаң ине", - тип һөйләшеп тә алабыҙ. Сөнки әҫәрҙең йөкмәткеһенән ситкә сығып, ундағы хәл-ваҡиғаларҙы бөгөнгө көн, йәки тарих мәнәнмә сағыштырып, фекерҙәрен белдереүселәр һирәгәйҙе. Был хәл башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә генә түгел, хатта рус теле уҡытыусылары ла әҫәрҙе анализлау һәм йөкмәткеһен һөйләп биреү проблемаға әүерелә тигәндә белдерә.

Туғыҙынсы синыфты тамамлаусыларҙы Төп дәүләт имтиханына үткәреү өсөн ойошторолған әңгәмәләшеүҙә лә ҡыйынлыҡ кисергән балалар бар. Был балаларҙың үҙ-ара ла, өлкәндәр менән дә йәнле аралашыу осраҡтары кәмеүенә лә бәйле тип уйларға урын бар. Үҫмерҙәр бергә йыйылышып, һәр береһе телефонда ултыра, ата-әсәйҙәр ҡайсаҡ телевизор ҡабыҙып, үҙ эше менән мәшғүл, хатта үҙҙәре үк телефонда ултырырға мөмкин. Шуға ла балаларҙың телдәре һуң асыла, беренсе класҡа килгәндәренең телмәр проблемаһы бар, бөтә өндәрҙе лә дөрөҫ әйтә алмайҙар. Балалар менән күберәк туған телебеҙҙә һөйләшергә, уларға башҡорт халҡының йолалары, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәте тураһында һөйләргә, күрһәтергә, ауыҙ-тел ижады менән таныштырырға кәрәк.

Был йәһәттән тыуған районым Салауатта "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының эшмәкәрлеге бик күңелемә хуш килде. Улар мәктәп менән тығыҙ бәйләнештә эшләй һәм балаларға йырҙар өйрәтәләр, аш-һыу серҙәренә төшөндөрәләр, милли уйындар ойошторалар. Уларҙың эшен кинерәк йәйелдерергә, улар менән бергә тығыҙыраҡ хеҙмәттәшлек итергә кәрәк. Әлбиттә, ҡала ерендә быларҙы атҡарып сығыу ҡатмарлыраҡтыр ҙа, шулай ҙа киләсәк өсөн бик мөһим.

**Гүзәл ҒАЙСИНА,**
**Нефтекама ҡалаһы Башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы - 2023" еңеүсеһе.**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

# ЯҠЫНДАРЫҢДЫҢ ТОРМОШОН...

## үпкәләүҙәрең менән ағыулама



**Ғәҙәттә, берәй кеше тураһында "уны холҡо насар", тип һөйләйҙәр икән, иң тәүҙә уның башҡаларҙы һанға һуҡмауы, тиҙ үсегеп барыуы, барыһын да үҙенсә генә эшләтергә тырышыуын күҙ уңында тоталар. Үпкәләү, рәнйеп барыу кеүек тойғолар кисереп, үҙен-үҙе "ашап" йәшәүселәр тап шундай була ла инде. Үпкәләүҙең сәбәптәре нимәлә? Уның сәләмәтлек өсөн зыяны, был кире тойғоно кисереүҙән ҡотолоу юлдары бармы? Бөгөн ошо хаҡта психолог Гөлсинә ЙОСОПОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**➔ Үпкәләү - гүзәл затҡа хас тойғо тиҙәр, шул дөрөҫмө? Үпкәләү кире тойғо икәнен аңлайбыҙ, шулай ҙа уға аныҡ ҡына аңлатма биреп буламы?**

- Үпкәләү барыбыҙға ла хас. Ирҙәр ҙә үпкәләй. Әммә ир-егет тойғоларын тышҡа сығарып бармай, ҡатын-ҡыҙ иһә, киреһенсә, үҙендә тота алмай. Айырма шунда ғына. Ябай ғына итеп әйткәндә, үпкәләү - ул үҙеңә ҡарата ғәҙелһеҙлек тойоу. Мин генә хаҡ, мин генә дөрөҫтө һөйләйем, миненсә генә булырға тейеш, тигән уйҙар ҙа үпкәләүгә килтерә.

Нисек кенә булмаһын, үпкәләү кешенең тормошон нык ҡына ҡатмарлаштыра: туғандары, эргәһендәге башҡа кешеләр менән мөнәсәбәттәрен боҙа, яйлап үҙенең холҡо ла насарая, ул манипуляторға әйләнә, ошо рәүешле үҙенә кәрәкте алырға өйрәнә. Ошолай дауам итһә, барыһы ла үпкәсел кеше менән аралашыуҙан ҡаса башлаясаҡ. Гел үпкәләп йөрөүҙән үҙенең сәләмәтлегенә лә ҡаҡшай. Башында гел генә ошо ситуацияны әйләндерә, асыулана, ҡабат-ҡабат стресс кисерә. Йәшәргә көс тапмай, үпкәләгән кешеһенә ҡыйынлыҡ тыуҙырасаҡ ситуацияларҙы күҙ алдына килтерә, уға ла насар булһын, тип теләй, ошонан үҙенсә ғәҙеллек эҙләй. Үпкәсел кеше тормошҡа ҡыуана белмәй. Стресс, депрессия һөҙөмтәһендә психосоматик сирҙәр барлыҡҡа килеүе ихтимал. Ул ысын мәғәнәһендә, үҙен үҙе "ашап" бөтә.

**➔ Бындай кешеләр үҙҙәренең хәлен тойомлап, белгескә мөрәжәғәт итәме? Һеҙҙең тәжрибәлә кемдәргә үпкә тотоп йөрөүселәр йышыраҡ осрай?**

- Миңә башлыса ҡатын-ҡыҙҙар мөрәжәғәт итә. Ниндәйҙер проблеманы хәл итергә теләп килеүселәр араһында үпкәләү кеүек тойғолар кисереп йәшәүселәр барлыҡҡа ла асыҡлана. Әйтәйек, атай-әсәйенә үпкәләүселәр күп. Бында шуны аңлау мөһим: атай-әсәй беҙҙе ошо яҡты донъяға тыуҙырған, йәшәү бүләк иткән. Тәрбиәләп үҫтергән, уҡытҡан, кеше иткән, оло тормош юлына сығырға ярҙам иткән. Быларҙы бирә алмағандары ла бар, әлбиттә. Әммә беҙ уларға яҡты донъяны бүләк иткән өсөн генә лә рәхмәтле булырға тейешбеҙ. Ә инде тәрбиәләгән, уҡытҡан икән, икеләтә, меңләтә рәхмәтле булыу мөһим.

Эйе, ҡасандыр йылы һүҙ әйтмәгәндәр, башҡа туғандарыңа күберәк иғтибар бүлгәндәр, бәлки, быларҙың барыһы ла һинә шулай тойолған ғыналыр. Нисек кенә булмаһын, быларҙың барыһының да үҙенең сәбәбе бар. Мәҫәлән, атай менән әсәй үҙ ғаиләһендә йылылыҡ, мөхәббәт алып үҫмәгән икән, быны балаһына бирә лә алмай. Сөнки ул асыҡтан-асыҡ наҙ күрһәтеп, яратышып ултырыуҙы күрмәгән, был уның өсөн ят нәмә. Унар бала үҫкән ғаиләләрҙә һәр береһен сөсөлдәтеп ултыра ла алмағандарҙыр, эш баҫҡан, унан милләтебеҙҙең менталитеты ла үҙ ролен уйнай. Әсәйҙәр балаһын нык иркәләтмәһә ни, беҙҙә, ана, өләсәйҙәр ниндәй шәп! Улар баланың күңелен үҫтереп, тәрбиәһен бирә алған элек. Улайға китһә, үҙегеҙҙең ҡаты ғына күренгән әсәйҙәрегеҙгә күҙ һалығыҙ, ейән-ейәнсәрҙәренә ниндәй мөнәсәбәттә улар: башынан һыйпап, арҡаһынан һөйөп, бөтөн телеген үтәп, таҡмаҡлап бейетеп, тәмле ашатып өлтөрөп тора. Шуға күрә, бөгөндән башлап ошоно аңларға һәм ата-әсәгә ҡарата үпкәнән ҡотолорға кәрәк.

**➔ Атаһы менән әсәһенә үпкәләп йәшәгәндәрҙән тыш, балаларына үпкә тотоусылар ҙа күпме арабыҙҙа...**

- Быға кемдер көлөп кенә ҡарар, бәлки. Ҡатын балаһын ауыр тапһа, һөҙөмтәлә һаулығы ҡаҡшаһа, йәки бала арҡаһында шәхси тормошон ҡора алмаһа, үҙен элеккесә иркәле итеп тоймай башлаһа, бала тапҡандан һуң йәшәүе ҡырҡа үҙгәрһә лә үҙе лә аңламаған үпкәләү барлыҡҡа килә. Бындай ҡатын балаһын әрләп-һуғып үҫтерә, арала ышанысһыҙ мөнәсәбәт юғала. Бала ла әсәһенә ышанмай башлай. Ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләр тыуып тора. Аҙағыраҡ иһә гәйеп тойғоһо кисереү, бала алдындағы ул гәйепте нисек тә булһа юйырға тырышыуҙар, үҫеп бөткән булһа ла контролдә тотоу, үҙендән айырып ебәрмәү килеп сыға. Был әсәй балаһы үҙенең ғаиләһен ҡорғас та ҡыҫылып йонсой, үҙенә иғтибар талап итә. Яңынан-яңы талаптар, үҙенсә эшләтергә тырышыуҙар, үпкәләүҙәр - был түңәрәктән ҡотолоу юлын табыуы бик ауыр.

Бер нәмәне иҫтә тоторға кәрәк - бала менән сәләмәт мөнәсәбәттәр урынлаштырыу мөһим. Ул нисә йәштә булыуына ҡарамаҫтан, уға тиң итеп ҡарағыҙ. Бала беҙгә бүләк итеп ебәрелгән. Ул да кеше. Уның да фекере, теләктәре, ирке бар. Уның менән нисек теләйбеҙ - шулай итеү, иркен сикләү, баҫыу яҡшы нәмәгә килтермәй.

**➔ Үпкәләүҙең тағы ла ниндәй төрҙәре була?**

- Ни тиклем сәйер яңғырамаһын, кешенең үҙенә лә үпкәһе була. Күп осраҡта улар үкенестәрҙән тора. Нисә йыл ҡәҙеремде белмәгән кеше менән йәшәгәнмен, оҡшамаған һөнәр үҙләштергәнмен, күңел тартмаған эштә эшләгәнмен, теге йәки был осраҡта дөрөҫ юлды һайламағанмын, үҙемде яңылыш тотҡанмын һ.б. Бына ни өсөн һәр ваҡыт күңел яҡтан шөғөл менән булырға, күңел ҡушҡанды эшләү мөһим. Йөрәк, күңел беҙҙе алдамай. Ҡыҙғанысҡа күрә, тик аҡыл менән үлсәп, ҡурҡып, билдәле сиктәр эсендә генә йәшәргә мәжбүрбеҙ. Ғүмер ахырында үкенеп ултырабыҙ, башҡаларҙы әрләйбеҙ һәм гәйепләйбеҙ. Әлбиттә, иң тәү сиратта үҙ-үҙебеҙҙән ризаһыҙлыҡ килеп тыуа ла инде. Күп проблемаларҙың башы - үҙебеҙҙе ҡабул итмәү, үҙебеҙҙән риза булмау, үҙебеҙгә үпкәләү. Үҙен ҡабул итмәгән кеше башҡаларҙы ла ҡабул итмәй һәм һәр ваҡыт йөй эҙләй, тормошонан ҡәнәғәтлек тапмай, ҡыуана белмәй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шуны аңларға кәрәк: беҙ һәр ваҡытта ла башҡа кеше өсөн бар нәмәне хәл итә алмайбыҙ. Хәл итергә тейеш тә түгелбеҙ. Ирем йорт эштәрендә ярҙам итмәй тип, уға үпкәләнегеҙ икән, быныӊ нигеҙендә һеҙҙең аҡланмаған өмөттәрегеҙ ята. Уның да үҙенең эштәре, хәстәрҙәре бар, ул да арыған-дыр. Әхирәтегеҙ ҙә һеҙҙең менән осраша алмауы бар, хәҙер инде үҙенең балалары булған балағыҙ ҙа ялын һеҙгә генә бағышлай алмай. Тормоштан алынған бындай ябай ғына миҫалдарҙы әллә күпме килтерергә була. Бындай хәлдәр көн һайын булып тора һәм шуға ла үҙ-үҙебеҙҙе йәлләп, башҡаларға үпкәләп ултырыуға арнамайыҡ ғүмеребеҙҙе. Хатта иң яҡын кешегеҙ ҙә үҙенең тормошо менән үҙенсә йәшәргә хаҡлы - был аксиома. Ошоно аңлайыҡ та, уларҙы ла, үҙ-үҙебеҙҙе лә ихтирам итеп йәшәйек.**

**Ләйсән ВӘЛИЕВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Заһретдин уны Ирәндек ҡуйынына һырынып ултырған йәшел сауҡалыҡ тип хис итте. "Нисек тә ҡайындарға барып етергә кәрәк, шул саҡта тере ҡалырмын", - тип уйланы.***



# АТЛЫ БАШҠОРТ

Рамаҙан ӨМӨТБАЕВ

Повесть

## V

Рядовой Заһретдин Итәлмасовты хужалыҡ взводына күсерҙеләр - йөк ташый торған булаусы иттеләр. Ул тәүге көн ҡыҙылармеецтарҙың ашханаһына утын ташыны. Икенсе көн ҡала пекарняһынан икмәк килтерергә ҡуштылар.

Бынаһы бик фажиғәле көн булды. Ул, ҡыҙылармеецтар һаҡлап торған пекарня ихатаһына инеп, атын икмәк ҡабул итә торған тәҙрә төбөнә туҡтатты. Бричкаһы өҫтөнә ҙур брезент йәйеп, өлгөһө алынған тәҙрә аша үҙ эскадроны өсөн ике йөҙ буханка арыш икмәге ҡабул итеп алды. Яңы ғына мейестән сыҡҡан, тәмле еҫ аңҡытҡан йылы буханкаларын брезент менән ҡапланы ла юлға сыҡты. Ҡала уртаһындағы баҙар майҙаны аша үткән саҡта ҡара бушлат кейгән ФЗО малайҙары көтмәгәндә Заһретдиндың арбаһына ябырылды. Береһе бысаҡ менән брезентты ярып ебәрҙе, ә ҡалғандары йөгөнән байтаҡ икмәген талап алды. Заһретдин айбарланып ҡулындағы сыбыртҡыһын болғауҙан башҡа артыҡ ырата алманы. Ашханаға килтереп икмәк тапшырғанда туғыҙ буханка икмәге етмәне. Быны шунда уҡ вазифаһынан бушаттылар ҙа ун биш тәүләккә гауптвахтаға яптылар. Бына ошонда ғына ул үҙ яҙмышы тураһында ныҡлап уйланырға ваҡыт тапты... Нишләп кенә шул тиклем бешәлкәһеҙ кеше булып сыҡты? Атлы ғәскәрҙән бер ни ҙә ҡулынан килмәгән өсөн ҡыуып тигәндәй ебәрҙеләр, ә бында ниндәй бәләгә тарыны! Нисек инде ул, ә? Бөтә кешенеке кеүек башы бар, хатта яҡшыраҡ та, сөнки иҫәп-хисапҡа шәп, эш эшләрлек аяҡ-ҡулы ла имен, ә бына булдыҡһыҙлығы һәр яҡлап ҡырын һуға.

Уйлана торғас, бөтә ғәйепте ҡатыны Маһитапҡа япһарҙы. "Тик ул ғына мине иркә бала кеүек тәрбиәләне, тәмле-татлы ашатты, әсерҙе, йөртте бер ниндәй ҙә эш ҡушманы, ә үҙем, күрәһең, эшкә бик атылып тормағанмындыр инде. Тора-бара үҙемдең дә ҡара эшкә дәртем һүнде, тере ялҡауға әйләндем. Ысынлап та, минең ҡулға салғы тотоп бесән сапмағанға, балта алып утынға бармағанға биш былтыр заман үтеп китте бит. Бесәнен өмә менән саптырҙым, утынын старателдәр килтереп бирҙе. Аҙна һайын мунса яҡтырып арҡамды ла ҡайын миндек менән үҙем сапҡаным юҡ бит. Унының да, "ҡулыңды яндыраһың" тип, Маһитап саба торғайны. Алтын үлсәнең, күпме мәғдән һинең аша үтте, ә ат эйәрләп, шуға атланырға ла өйрәнмәгәнһең. Мәжнүн! Юҡ, был рәүешле йәшәп булмай киләсәктә..." Уйланды, ҡаты уйланды Заһретдин. Бер нисә көн үтеүгә, гауптвахтаға уның хәлен белергә тип талҡан килтергән Ғилмишәриф ауылдашын таныманы. Улар һөйләшкән рәшәткә артында маңлайы йыйырсыҡтар менән һырлана төшкән, элекке моңһоҙ, ғәмһеҙлек бөҫө баҫҡан битендә уйсан, етди һыҙаттар өҫтәлгән бөтөнләй икенсе кеше баҫып тора ине. "Үҙгәргән ағай, бик ныҡ үҙгәргән, бер нисә көн эсендә битенә ҡартлыҡ сырайы кергән, һөйләшеүе лә бөтөнләй икенсе", - тип уйланы Ғилмишәриф.

- Земляк, уйланым, уйланым да жалаюащи булып фронтҡа китергә хәл иттем, - тип оҙатып ҡалды Заһретдин. Гауптвахтанан сыҡҡас, уны фронтҡа әҙерләнеп ятҡан запас полкка оҙаттылар. Ул винтовканан атыу күнекмәләрен, практик занятиеларҙа дошманға һөжүм итеү, оборона тотоу, яҡын бойҙа ҡоралһыҙландырыу алымдарын өйрәнде лә үҙе теләп фронтҡа китә торған беренсе маршевый ротаға яҙылды.

Эшелонға тейәлерҙән алда өҫтөнә өр-яңы кейем кейенеп, ауылдашы янына килеп китте. Заһретдиндың рухы күтәренке, күнеле бик ашҡынған төҫлө күренде.

- Йә, Ғилмишәриф ҡусты, (был уның беренсе тапҡыр яҡташын исеме менән атауы ине) әҙме-күпме бергә хеҙмәт иттек. Ауылда саҡта ни осрашып һөйләшергә тура килмәгәс, мин һине сәпсим белмәгәнмен икән, һин ысын да ир икәнһең. Улай-былай булһа, ҡустым, бәхил итешәйек. Заманалар ауыр, бәлки, барыбыҙға ла тыуған төйәккә кире ҡайтып күрмәгә насип та булмаҫ, - тине. Ғилмишәрифкә төбәлгән һорғолт-йәшкелт күҙҙәрендә йәш күренде. Ҡулының һырты менән күҙ йәшен һөрттө лә: - Ярай ҡустым. "Фронтҡа оҙаттым" тип еңгәңә бер-ике ауыҙ булһа ла хат яҙып ебәрерһең. Минең нишләптер ҡулға ҡәләм тотҡо килмәй, хат яҙырға күнел төшмәй, - тип ашығыс ҡына ҡулын бирҙе лә йүгерә-атлап казарма мөйөшөнә йүнәлде. Боролошҡа еткәс, артына йәнә бер әйләнеп, һаман урынында баҫып торған ауылдашына тағы ҡарап алды. Ғилмишәриф тә, үҙенең берҙән-бер яҡынын юғалтҡан кеше кеүек, бойоҡ ҡына казармаға атланы.

## VI

Оборона һыҙыштарында сафтары байтаҡ һирәгәйеп, ныҡ ҡаҡшаған часты яңы ғына алғы һыҙыҡҡа килгән маршевый роталар алмаштырҙы. Ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа: "Шырпы тоҡандырмаҫҡа!", "Тәмәке тартмаҫҡа!" - тигән команда килеп етте. Взвод командиры: "Бөгөн таң һарыһында һауаға атылған ҡыҙыл ракетанан һуң атакаға күтәреләбеҙ", - тип траншея буйлап йөрөп сыҡты. Марш менән килеп байтаҡ ҡына талсығыуға ҡарамаҫтан, бер кемдә лә йоҡо алманы, һәр кем ҡоралын, ҡоралынан алда үҙен атакаға әҙерләне. Донъяны шомло тынлыҡ баҫты. Бындай мәлдә һәр кем үткәнен дә, алдағыһын да уйларға мәжбүр.

Заһретдин да һалҡын винтовкаһын Маһитабын ҡосаҡлаған кеүек ҡосаҡлап, күнел йомғағын тағатып, үткән ғүмерен, йылдар ҡатламын аҡтара. Уның ғүмере лә гел генә ал да гөл булманы бит. Ауыл халҡы ни күрһә, ул да шуны күрҙе, улар татығанын татыны. Аслыҡ та, ялангаслыҡ та, әсеһе-сөсөһө лә бөтә ауылдаштары менән ҡуша барҙы: крәҫтиән эше, комсомол, ликбез... Илгә алтын кәрәк булғас, үҙ атаһы менән ошо эшкә кереште. Забойға төштө, үҙҙәренең яңғыҙ ҡола атты кәлешкәгә егеп һары балсыҡ ташыны. Машерт төбөндә бер ҡулына көрәк тотоп балсыҡ болғаны, ә икенсе ҡулы менән үҙҙәре йыйған канауҙан Дарыуҙы йылғаһының һыуын тартты. Бер аҙ эшләгәс иҫәп-хисапҡа сослоғон белеп ҡалған артель рәйесе уны алтын ҡабул итеүселәрҙең ҡыҫҡа сроклы курсына ебәрҙе. Бына шунан алып ошо көнгә тиклем старателдәрҙән көн һайын алтын ҡабул итте. Ҡайҙандыр алтын эҙләргә килгән кешеләр араһында үҙенең сибәрлеге, ҡиәфәте менән берҙәй айырылып торған, янбаштарына төшкән һап-һары сәсен ике толомлап үргән дингеҙ кеүек сөмбәй ҙур зәңгәр күҙле Маһитап күп тә үтмәй уға йәр булды. Заһретдиндың артыҡ күркәмлеге булмаһа ла, битенең мәтелегенә ҡарап тормай Маһитап уға тормошҡа сыҡты, ауыл ҡыҙҙары кеүек: "Китсе, китсе, шул мәтене, төҫ тиһәң төҫө, һын тиһәң һыны юҡ, торғаны һыу мискәһе", - тип торманы, ир затының өҫтәл башында ултырыуын да, аҡсаны табыуын да яратты. Эйе, ирҙең һылыулығы бер кискә...

Хаталанманы ул, Заһретдиндың кеҫә тултырып алып ҡайтҡан бондары, турысайға тейәп алып ҡайтҡан төк-төк тауарҙары берҙе-ике, иште ҡуш итергә торған Маһитапҡа хуш килде. Өлгөрөм ҡатын турысайҙы егеп, сылтлап торған кырандасҡа төрлө-төрлө сатин, атлас тауарҙар тейәп, рудник баҙарына ла йөрөштөргәләп ҡайтты. Мал малды ишәйтте, бол болдо арттырҙы. Маһитаптың аҡсаһы, байлығы артҡан һайын, Заһретдиндың өйө лә, ихатаһы ла үҙгәрә барҙы. Элек күршеләре кереп йөрөр өсөн ситән аша уйылған бәләкәй ҡапҡа бөтөнләйгә ябылды, ә тораҡ емерек ситән урынына шәм һымаҡ ҡарағайҙан сыҫҡан да үтә алмаҫлыҡ бейек ҡойма пәйҙә булды. Нигеҙҙәре серей башлаған иҫке өйөн мал һарайы итеп эшләп, өр-яңынан йорт һалдылар. Ҡыйығын ҡалай менән япырҙылар.

Маһитап өйгә, малға хужа булып алғас, Заһретдиндың, зимагорлыҡ ҡылыҡтарын әкренләп үҙ яйына ҡайыра башланы. Башта көн дә ҡайһыны туҫтаҡ, ҡайһыны мөҡсай тотоп йомошҡа йөрөгән ауыл тулы туғандарынан биҙҙерҙе, ә унан инде зимагор старателдәрҙән айырҙы.

Иҫерек Заһретдинды ҡултыҡлап килеп ингән бер нисә старателде эт тә ашамаҫлыҡ һүҙҙәр менән баштан-аяҡ ҡойондорғайны, тегеләр нисек табан ялтыратҡанын һиҙмәй ҙә ҡалды.

Бына шулай итеп, ғүмер һөрә ине бит ул Заһретдин. Әгәр ошо ҡәһәр һуҡҡан Гитлер һуғыш башламаһа, әле лә хөрриәт донъяла типтереп йәшәп ятыр ине. Юҡ, бөгөнгө Заһретдин ғәмһеҙ, кеше хәсрәтенә күҙ йомоп үтә торған элекке Заһретдин түгел инде. Ошо ҡыҫҡа ғына армия хеҙмәте күп нәмәгә өйрәтте. Ауылдашы Ғилмишәрифкә әле лә тәме тел осонда торған бойҙай талҡаны өсөн мең рәхмәтле. "Имен-аман ауылға әйләнеп ҡайтырға насип булһа, Маһитаптың ай-вайына ҡарамай, ҡорбан салыр, бөтә мөлкәтемде уртаға һалып, ауылдаштарымдың береһен дә: олоһон да, кесеһен дә, ҡалдырмай ҡунаҡ итер инем. Өй беренсә йөрөп, ауылды урап сығыр инем. Тәкәбберлегемде ҡабул итә алмай, минән ситләшеп, оҙатырға ла килмәгән ағай-энемдең һәр береһенең тубыһына ятып күҙ йәшем менән илап бәхиллек биреүҙәрен үтенер инем", - тип ант итте. Бына ниндәй уйҙар борсоно ҡыҙылармеец Заһретдинды атака алдынан булған был тын кисте.

* * *

Заһретдин ҡулындағы ҡоралын ныҡыраҡ ҡыҫып тотто. "Ни күрһәк тә бергә күрәсәкбеҙ, кәрәк ерендә атып та, штыгың менән сәнсеп тә дошманды бергә дөмөктөрәйек. Бирешмә инде, ныҡ тор", - тип Заһретдин мылтығы менән һөйләшеп алды. Ысыҡтан тирләгән винтовкаһын, штыгын гимнастерка салғыйы менән һөртөп ҡоротто. Бил ҡайышына беркетелгән патронташындағы патрондарҙы янынан барлап сыҡты. Салбарының алғы бәләкәй кеҫәһенә һалынған: "Итәлмасов Заһретдин, 1902 йыл тыуған, 1050 уҡсы полк, 2 батальон, 3 рота, өй адресы: Башҡортостан, Ҡусҡар районы, Ялан ауылы, Итәлмасова Маһитап", - тип яҙылған медальонын да тағы бер һәрмәне. "Кеҫә төбөндә ҡыҫталып ятҡан, дошман менән алышҡан-фәләндә төшөп ҡалырлыҡ түгел", - тип үҙен тынысландырҙы. Ни өсөндәр, фотоға төшөргә йыйынған кеше һымаҡ, өҫбашын һыйпап гимнастеркаһының сырыштарын тартҡыланы, пилоткаһын төҙәтте. Штыгының осо менән итек табанына йәбешкән еүеш балсыҡты таҙартты. "Ярай әле, кисә генә күлмәк-ыштанды өр-яңынан алмаштырҙылар. Атакала үлеп-фәлән ҡалһам, өҫ-башым шаҡшы фашистан пагыраҡ булһын, битемдә сан, ҡатҡан бысраҡ ҡалмаһын", - тип Маһитабы биргән сигеүле батист ҡулъяулыҡын сығарып, һурығып, яңаҡтары эскә батҡан йөҙөн һөрттө. Бәйге сабыр алдынан бер һыҙыҡҡа теҙелә алмай ярһыған аттарҙыҡы кеүек дөпөлдәп типкән йөрәген тотоп ҡараны. Ғәжәп, күнелендә бер ҡарыш та ҡурҡыу әҫәре юҡ, ә йөрәге ашҡына.

Бына, ниһайәт, пушка, минометтарҙың гөрһөлдәгән тауыштары ишетелде. Әйтерһең дә, ҡиәмәт ҡупты, ерҙең аҫты өҫкә әйләнде - снаряд, мина шартлауынан ер һыҡранып һелкенде, ҡолаҡтар тондо, бөтә донъя гөүләне. Ярты сәғәт самаһы барған артиллерия әҙерлеге уның туҡтауын түҙемһеҙлек менән көтөп ятҡан боецтарға мәңгелек булып тойолдо. Ҡапыл ер һелкенеү туҡталды ла, йөрәктәргә әллә ни төрлө шөбһә һалып, тирә-йүн бөтөнләй һил булып ҡалды. Күп тә үтмәй, күкһел томан менән ҡапланған иртәнге һалҡынса һауаны йыртып ҡыҙыл ракета юғарыға атылды ла, әкренләп һүнә-һүнә, ергә төштө.

- За Родину! За Сталина! - тигән ҡеүәтле оран яңғыраны. Һуғышсылар менән бергә Заһретдин да окобынан сыҡты. Мылтығын ныҡыраҡ ҡыҫып тотоп, себен кеүек, зыйлап осҡан пуляларға, снаряд, мина тауыштарына ҡолаҡ та һалмай алға йүгерҙе.

Ошо секундта Заһретдин өсөн, ниндәй генә ауыр ғазаптар булһа ла еңеп, тау башына менеп етеүҙән дә оло бурыс юҡ ине. Бәләкәй генә ҡалҡыулыҡтың икенсе яғына төшкәс, япраҡтары ҡара янып ҡойолған сауҡалыҡ күҙенә салынды. Заһретдин уны Ирәндек ҡуйынына һырынып ултырған йәшел сауҡалыҡ тип хис итте. "Нисек тә ҡайындарға барып етергә кәрәк, шул саҡта тере ҡалырмын", - тип уйланы. Тере ҡайындар уның ус эсенә тотоп килгән йәнен ҡурсалап алып ҡалыр кеүек ине. Шәп йүгереүҙән тыны бөтөп, беренсе ағасҡа бәрелде лә унға боролоуы булды, һул ҡолағының япрағын йыртып пуля зыйлап үтеп китте. Үҙ траншеяларын ташлап тау түбәненә ҡаса башлаған фашистарҙың береһе үксәненә баҫып килгән Заһретдингә таба әйләнде лә яҡынан атты. Ләкин был пуля Заһретдинды аяп үтте.

Үс алыу теләге менән йөрәге ярһыған ҡыҙылармеец бөгөлә-бөгөлә йүгереп ҡасып барған дошманды ҡыуып етте лә бөтә көсөнә штыгы менән немецтың арҡлы һанына сәнсте. Ғүмерендә тәкә лә салмаған кешенең әҙәм ғүмерен ҡыйыуы Заһретдинда артабан да ҡаты үс алыу тойғоһон уятты, дошманға нәфрәт ҡомарын арттырҙы.

**(Дауамы. Башы 29-32-се һандарҙа).**

***✓ Ата-бабаларҙан килгән был традиция - ир-егеттәрҙең илде, ерҙе һаҡлау өсөн көрәше, яуҙарға күтәрелеүе генә үҙгәрмәҫ. Яугирлыҡ ҡеүәте, көсө быуындан-быуынға тапшырыла, уға ваҡыт үлсәүе юҡ...***



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙОҠОҢ ТУЙҺЫН

■ Ауыҙ ҡыуышлығына металл биҙәүестәр тағыу периодонтитҡа килтерә, был ауырыу һөҙөмтәһендә тештәр ҡойолоуы ихтимал. Германияның Грайфсвальд университеты ғалимдары ошо хаҡта иҫкәртә. Университет хеҙмәткәрҙәре үткәргән тикшеренеүҙәрҙә тел һәм ирен пирсингы булған 408 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың һәр бишенсеһендә бер нисә пирсинг булып, даими рәүештә металл биҙәүестәр йөрөткән. Араларында 19 йыл биҙәүес таҡҡандар булған. Ауыҙ ҡыуышлығында даими рәүештә металл булыуы тештәр, теш ҡаҙнаһына шул тиклем кире йоғонто яһауы асыҡланған. Пирсинг, бигерәк тә телдәге пирсинг теш ҡаҙнаһының йәрәхәтләнеүенә, ҡанауына килтерә, ҡаҙна тамыры асыла. Былар теште урынында тотоп тороусы бәйләүсе туҡыма - периодонтит билдәләре. Пирсингты оҙағыраҡ йөрөткән һайын, ауыҙ ҡыуышлығы сәләмәтле нығыраҡ ҡаҡшай. "Стоматологтар пирсингтың зыяны тураһында халыҡты иҫкәртергә тейеш. Кем металл биҙәүес йөрөтә, уларға бынан баш тартырға кәңәш итәбеҙ", - ти ғалимдар.

■ Иртә үлем хәүефен 40 процентҡа түбәнәйтеү мөмкинлеге биргән ысул асыҡланған. Ул сәләмәт йоҡо режимы. Көн һайын иртә ятып, иртә тороу хроник сирҙәргә аҙып китергә мөмкинлек бирмәй. Европа ғалимдары ете йыл дауамында 1750 кешенең сәләмәтлеген күҙәткән. Улар барыһы ла йоҡо режимы, көн дауамында яҡтылыҡ тәьҫире һәм физик әүҙемлекте күрһәтеп торған махсус ҡорома тағып йөрөгән. 1015 ҡатнашыусы йоҡо режимын тотҡан, 744-ендә йоҡо дефициты (тәүлегенә 7 сәғәттән аҙыраҡ) күҙәтелгән. Ошо осор эсендә ҡатнашыусыларҙың 176-һы вафат булған. Йоҡоһо туйған кешеләрҙә иртә үлем хәүефе 40 процентҡа түбәнерәк булыуы асыҡланған. Ғалимдар кәңәше буйынса, кеше тәүлегенә 7-9 сәғәт йоҡларға тейеш. 12 йәшкә тиклемге балалар 9-12 сәғәт, үҫмерҙәр 8-10 сәғәт йоҡлаһын. Йоҡо туймау йөрәк, бөйөр, ҡан тамырҙары, диабет, инсульт, һимереү, депрессияға килтереүе ихтимал.

■ Ковид пандемияһы донъя кимәлендәге ғәҙәттән тыш хәл булыуҙан туҡтай, әммә кешелек сәләмәтлегенә ҡурҡыныс менән янауын дауам итә, тип рәсми рәүештә иғлан иткәйне өс ай элек Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы етәксеһе Тедрос Гебрейесус. Тимәк, беҙ короновирус тураһында һирәгерәк һөйләйбеҙ, тик ул юҡҡа сыҡмаған, һаман да үҙгәрә һәм планета буйлап тарала. Хәҙер инде вирустың яңы варианты барлыҡҡа килгән, уның рәсми булмаған атамаһы - Эрис. Бөтөн Рәсәй һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәренә ярашлы, эрис бөгөнгө көндә 50 илдә, шул иҫәптән АҠШ, Бөйөк Британия, Ҡытай, Көньяҡ Корея, Япония, Канада, Австралия, Сингапур, Франция, Испания һәм Португалияла теркәлгән. Эрис омикрондың бер төрө, ул тиҙ тарала, кешегә тиҙ йоға, шулай ҙа быға тиклем булған төрҙәрҙән бер яғы менән дә айырылмай. Шулай уҡ Эрис быға тиклем ауырығандарға ла, вакцина яһатҡандарға ла йоға ала. Билдәләре шул уҡ, температура күтәрелә, йүткереү барлыҡҡа килә, хәл бөтә, тамаҡ ауырта, мускулдар һыҙлай, тын ҡыҫыла. Ҡайһы бер осраҡтарҙа тәм һәм еҫ һиҙеү юғала.

*ЗАМАН ҺЫНАУҘАРЫ*

# ИР-ЕГЕТ ҠЕҮӘТЕ...

## илде ҡурсалай

**Махсус хәрби операцияла һәләк булған Радик Венер улы Килмөхәмәтов тураһында мәҡәлә яҙырға ниәт иткәс, әсәнең былай ҙа өҙгөләнгән күңел яраларына һаҡһыҙ ҡағылып, хәтирәләрен яңыртыу урынһыҙ булмаҫмы, тигән уй оҙаҡ ҡына тынғылыҡ бирмәй йөҙәтте. Бирәм тигән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына, тигәндәй, редакцияның буш бинаһын маскировкалау селтәре үреү цехы булараҡ файҙаланған "Көмөш ирекмәндәр"гә ярҙамға килгән Сәриә апай Килмөхәмәтова менән сираттағы осрашыу шиктәремде юҡҡа сығарҙы.**



**...**"Йыл да август башында билдәләнәсәк Һауа десант ғәскәрҙәре көнөнә Радигым алдан әҙерләнә торғайны, - тип һөйләп китте Сәриә апай. - Формаһын үтекләп, түш билдәләрен таҙартып элер ҙә, оҙаҡ ҡына ҡарап һоҡланып торор ине. Сәбәбен яҡшы беләм - ошо элиталы ғәскәрҙә хеҙмәт итеү өсөн ул үҙен бәләкәйҙән әҙерләне.

Беҙ бер арауыҡта Татарстанда йәшәнек, Радик башланғыс белемде Түбәнге Кама ҡалаһында алды. 4-се класты Мәләүеҙдә 1-се мәктәптә дауам итте. Тиҫтерҙәрен шул тиклем оҡшатты, класс етәксеһен, уҡытыусыларҙы хөрмәт итте. Тырыш булды, сәмле ине. Ул йылдарҙа спортҡа иғтибар көсәйгәйне. Мәктәптән хоккей түңәрәгенә яҙылып ҡайтҡан да, ишек асылыу менән һөйөнөслө хәбәре менән уртаҡлаша һалды: "Мин үҫкәс хәрби булам, тренерым Сергей Михайлович ысын егеттәр әҙерләйем тине",- ти.

Баламдың ҙур спорт сумкаһын күтәреп, күнекмәгә сығып киткәне әле лә хәтерҙә. Хоккей таяғы үҙенән ике тапҡырға оҙонораҡ, һалҡынға, буранға ҡарамай, һис зарланмай йөрөнө. Бер аҙ үҫә төшкәс, мәктәп өсөн, һуңғараҡ ҡала, шунан район исеменән төрлө кимәлдәге ярыштарға йөрөнөләр. Мәктәптә яҡшы уҡыны, үҙен хәрби хеҙмәткә, Һауа десант ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеүгә әҙерләне. "Хеҙмәт һәм оборонаға әҙер" нормаларын тапшырып, I дәрәжә таныҡлыҡ алды.

**...**Тағы бер хәлде һөйләмәй булдыра алмайым. Үҫмер сағында комиссия үткәндә ошо ғәскәргә эләгеү өсөн буйының бер нисә сантиметр етмәүен әйткәндәр. Ҡайтты ла, иҙәнгә үҙе ҡоролма эшләп, кәүҙәһен таттырып ята, ауырта, күрәһең, әммә өндәшмәй. Аяҡтарына гер бәйләп, турникта аҫылынып тора. Йәлләп, етте, үҙеңде яфалама, балам, тим. "Әсәй, миңә саҡ ҡына үҫергә кәрәк", - тип йылмая үҙе. Күмертау ҡалаһында парашюттан һикереү буйынса күнекмәләрҙә шөғөлләнеп, танытмалы булды. Беренсе тапҡыр ошо һынауҙы үткәс, шатланғанын белһәгеҙ икән! Ваҡыт тарлығына ҡарамай, күрше ҡалаға аҙна һайын күнекмәгә йөрөнө.

**...**Мәктәптән һуң 42-се һөнәрселек лицейына уҡырға инде. Нимәлер эшләргә, йүнәтергә, үҙгәртеп ҡорорға, хатта тегергә яратты. Һәр эште күңел һалып башҡарҙы. Берәй нәмә эшләр алдынан мотлаҡ атаһы менән кәңәшләште. 1988-1990 йылдарҙа Совет Армияһы сафына алынды. Ни сәбәптәндер, бәләкәйҙән ныҡ әҙерләнгән һауа десанты ғәскәрҙәренә эләкмәне, Себер яғында Канск ҡалаһына ебәрҙеләр. Һәр һалдат һымаҡ, беренсе айҙарҙа тыуған яғын, беҙҙе һағынды, юҡһынды. Атаһы Радиктың күңел кисерештәрен аңланы һәм хеҙмәт иткән урынға улыбыҙҙы һауа десанты ғәскәрҙәренә күсереүҙәрен һорап ғариза яҙҙы. Уҡынылар, рәхмәт төшкөрө, улыбыҙҙы февраль айында Фирғәнә ҡалаһындағы частҡа күсерҙеләр.

**...**Беҙҙең ғаиләлә бер-беребеҙгә көтөлмәгән сюрприз эшләү йолаһы булды - тоттоҡ та, алдан хәбәр итмәй, ул хеҙмәт иткән частҡа, улыбыҙ эргәһенә барҙыҡ. Марш-бросоктан ҡайтып ҡына торған мәлдәре ине - арыған, тирләгән, аяҡтарына сөйәл сыҡҡан, әммә шул тиклем шат, ҡәнәғәт йылмая. Беҙҙе күргәс, аптырауынан сүкәйә төштө, күҙемә күренәһегеҙме әллә, тип ҡосаҡлап алды. Ул ихлас, асыҡ булды, бер ҡасан да асыулана, үпкәләй белмәне. Кемебеҙҙеңдер тыуған көнө булһа, кистән ҡулдан открытка эшләп бүләк итәбеҙ, ул быға тиклем шулай дауам итте. Улым иртүк яныма килә лә: "Әсәй, һине мин беренсе булып ҡотланыммы?" - тип һорар ине. Быйыл беренсе тыуған көнөм улымдың ҡотлау открыткаһы, уның ихлас йылмайыуынан башҡа үтте...

**...**Армиянан ҡайтҡас, "Эколайн" предприятиеһына водитель булып эшкә урынлашып, төрлө төбәккә йөрөнө. 90-сы йылдарҙа рэкет, юлдағыларҙы талау, һөжүм итеүҙең ҡоторған осоро. Тапшырылған йөктө имен-аман алып барып еткергәнсе, ҡайтып күҙемә күренгәнсе, йөрәгем өҙөлөп төшөрҙәй булып хафалана инем. Тиҫтерҙәре һымаҡ, ғаилә ҡорҙо, улдары Артур менән Булатҡа бөтә күңел йылыһын бирҙе, уларҙы үҙаллы тормошҡа әҙерләне. Ул үҙ өҫтөндә ныҡ эшләне, физик йәһәттән генә түгел, рухи яҡтан да үҫеште, китап уҡырға яратты. Томансы ауылында йәшәгән өләсәһенә велосипед менән йөрөнө. Ҡайҙалыр юлға сыҡһа, мотлаҡ блокнот, ручка алды - һүрәт төшөрөү һәләте лә бар ине уның. Армиянан килгән хаттарын да рәсем менән биҙәп ебәрер ине.

**...**Украинала боларыш башланғас, уҙған йылдың сентябрендә махсус операцияға юлланды. Улар гел алғы һыҙыҡта йөрөнө. 4 ай дауамында даими бәйләнештә булды. Бәрелешкә ингәнен бер ҡасан да әйтмәне, телефоны һүнгәненән үҙем аңлай инем. Операциянан ҡайтыу менән беренсе һүҙе: "Әсәй, мин һине яратам!" - булды. Ошо ҡыҫҡа һөйләм бөтә хәбәрҙән бөйөгөрәк ине минең өсөн. Кеше менән тиҙ уртаҡ тел тапты, дуҫтары күп ине. Ҡайтҡас, илебеҙҙең төрлө төбәгенән йыйылған хеҙмәттәштәре менән даими бәйләнештә булды, ҡулынан телефоны төшмәне. "Унда мин кәрәгерәк, әсәй, йәш егеттәрҙе һаҡларға кәрәк", - тиер ине. Вахта ысулы менән Себерҙә эшләне, китергә йыйынып бөткән, самолетҡа билет алынған, үҙе һаман комиссариаттан саҡырыу көтә. "Хәбәр килһә, әсәй, тегендә китәм, эшкә барып тормайым", - ти. "Булдың бит, балам, йөрөмә, башҡа барма", тип ялынам. "Әсәй, һинең тулҡынланыуың миңә күсә, тыныслан", - тип арҡамдан ярата...

**...**Китте, бөтә ҡаршылыҡтарҙы йырып, февралдә тағы махсус хәрби операцияға юлланды. Эвакуациялау бүлеге механик водителе, зенит ракета батареяһы менән идара итеү операторы булды. Телефон аша һөйләшкәндә бер ҡасан да зарланманы, уның нимә менәндер риза булмағанын хәтерләмәйем дә. Ғүмерҙәре ҡыҫҡа булды улыҡайымдың, әйтеп бөтмәгән һүҙе, эшләп бөтмәгән башланғыстары, биреп бөтмәгән наҙы ҡалды", - тип тамамланы һүҙен Сәриә апай.

**...**Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, үҙен һалдат хеҙмәтенә әҙерләп, тыуған иле, азатлыҡ өсөн башын һалған "Киля" ҡушаматлы батыр яҡташыбыҙ Луганск Халыҡ Республикаһы биләмәһендә 16 майҙа батырҙарса һәләк булды. Радик Венер улының батырлығы "Ҡаһарманлыҡ өсөн" миҙалы менән билдәләнде. Ә Сәриә апай Килмөхәмәтова бөгөн махсус операцияла ҡатнашҡан яугирҙар өсөн маскировкалау селтәрҙәре үрә, ирекмәндәр ойошторған акцияларҙа ҡатнаша. Радиктың сираттағы отпускыға ҡайтҡан хеҙмәттәштәре әсәнең тыуған көнөндә Мәләүездә йыйылған. "Улымдың яратҡан йырҙарын башҡарҙылар, уның тураһында ижад иткән шиғырҙарын бүләк иттеләр, хәтирәләре менән уртаҡлаштылар", - ти Сәриә апай...

Йылдар үтер, заманалар үҙгәрер, ҡайғыларҙы ваҡыт дауалар, әммә быуаттар төпкөлөнән, ата-бабаларҙан килгән был традиция - ир-егеттәрҙең илде, ерҙе һаҡлау өсөн көрәше, яуҙарға күтәрелеүе генә үҙгәрмәҫ. Яугирлыҡ ҡеүәте, көсө быуындан-быуынға тапшырыла, уға ваҡыт үлсәүе юҡ...

**Рәфилә СИБӘҒӘТУЛЛИНА.**
**Мәләүез районы.**

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

# БУЛДЫРА АЛАҺЫҢ! ҠУЛЫҢДАН КИЛӘ!



Эшкинмәгән, булдыҡһыҙ, башһыҙ... Ошондай һүҙҙәрҙе ата-әсәнең үҙ балаһына әйткәнен йыш ишетергә тура килә.

Бәлки, улар быға әллә ни мәғәнә лә һалмайҙыр, әһәмиәт бирмәйҙер, әммә баланың күңеленә ғүмерлек яра һалыныуы бар. Берәй мөһим эшкә тотонор алдынан әлеге һүҙ ҡылт итеп иҫенә төшөп, "Мин булдыра алмаҫмын шул", "Ҡулымдан килмәҫ" тигән шик уянһа, үҙ-үҙенә ышанысы кәмейәсәк.

"Беҙҙән кеүек кешеләрҙән профессор тыумаҫ инде. Үҙебеҙ ауылда ғүмер иттек, балаларыбыҙ ҙа әллә ҡайҙа китмәҫ". Ата-әсәнән ошондай һүҙҙәрҙе лә ишетергә мөмкин. Ауылда йәшәү насармы ни? Кәрәкле һөнәр алып, тыуған ерендә һоҡланғыс ғүмер иткән кешеләр аҙмы? Йәшәй белгәндәр һәр ерҙә "ожмах" ҡора ала. Ата-әсәнең тырышлығын күргән бала киләсәктә улар кеүек булырға ынтыла. Балаһын "Президент буласаҡ!" тип үҫтергән ҡайһы бер милләт вәкилдәренән беҙгә лә өлгө алырға кәрәк. "Афарин, булдыра алаһың, ҡулыңдан килә", - тип дәртләндереп тороу кемгә оҡшамаҫ? Бала ла ата-әсәһенең, яҡындарының ышанысын аҡлар өсөн тырышасаҡ.

Кешегә бит ҡайһы саҡ бер һүҙ ҙә етә: донъянан төңөлгәндә - башын ҡалҡытырға, һөрлөккәндә - тороп баҫырға, ышанысын юғалтҡанда - өмөтләнергә... Ошо йәһәттән донъя мәҙәниәтенән һәм әҙәбиәтенән миҫалдар килтереп үтәйем.

...Неаполь фабрикаларының береһендә эшләгән ун йәшлек малай йырсы булырға хыяллана, әммә уның тәүге уҡытыусыһы: "Һин йырлай алмаясаҡһың. Тауышың тәҙрә ярығынан өргән елгә оҡшап тора", - тип белдерә. Малайҙың күңеле төшә. Бошонҡо ҡиәфәттә ҡайтып ингән балаһын күргән әсә, ябай крәҫтиән ҡатыны, улын ҡосаҡлап ала ла: "Һин йырларға өйрәнәсәкһең, ышан. Күреп торам: уңыштарың һиҙелә", - ти. Әсәгә балаһына йыр дәрестәренә түләргә аҡса йыйыр өсөн яланаяҡ йөрөргә лә тура килә. Ошондай ҙур ышаныс малайҙың тормошон ҡырҡа үҙгәртә. Донъяла билдәле йырсы Энрике Карузоны кем генә белмәй хәҙер!

...Лондондың галантерея магазиндарының береһендә эшләгән малай таңғы 5-тән тороп бинаны йыйыштырырға, ҡол һымаҡ тәүлегенә 14-әр сәғәт бил бөгөргә мәжбүр була. Ауыр һәм бер төрлө эште күрә алмаҫ хәлгә етә ул. Ике йыл интеккәндән һуң, артабан түҙемлеге етмәйәсәген аңлай. Бер көндө таң менән тора ла, тәғәм ризыҡ ҡапмайынса, йәйәүләп әсәһе янына юллана. Ул 15 саҡрым алыҫлыҡта ялланып эшләгән була. Малай әсәһенә илай-илай барыһын да һөйләп бирә, ҡабат магазинға ебәрмәүен үтенә. Ҡайтанан барырға тура килгән хәлдә, үҙ-үҙенә ҡул һаласағын белдерә. Унан элекке уҡытыусыһына оҙон итеп хат яҙа. Өлкән педагог малайҙың бик аҡыллы, башҡа эшкә һәләтле булыуын әйтә һәм үҙен уҡытыусы һөнәрендә һынап ҡарарға тәҡдим итә. Ошо һүҙҙәр малайҙың яҙмышын үҙгәртеп кенә ҡалмай, инглиз әҙәбиәте тарихына ҙур өлөш индерә. Был егет 77 китап яҙа, әҫәрҙәре өсөн миллион долларҙан ашыу аҡса ала. Бына шулай тыуа донъяла билдәле Герберт Уэллс исемле яҙыусы!

Был ваҡиғаларҙы әллә ҡасан, әллә ҡайҙағы Италияла, Бөйөк Британияла булған хәл тип кенә ҡабул итмәйек. Киләсәктәге бөйөк яҙыусылар, йырсылар, рәссамдар, архитекторҙар әле беҙҙең ғаиләләрҙә үҫә, мәктәптәрҙә белем ала. Уларға иғтибарлыраҡ булайыҡ, бәләкәй генә уңышын күреп, маҡтайыҡ, бергә ҡыуанайыҡ, ауыр һүҙ әйтеп, күңелен рәнйетмәйек, хыял ҡанаттарын һындырмайыҡ.

Маҡтағандан, яратҡандан бала боҙолмай. Киреһенсә, иғтибар етмәгәнлектән ҡаты бәғерле булып буй еткереүе ихтимал. Кәмһенеп үҫкән бала уңышҡа өлгәшә алмай.



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Центральному избирательному округу №10 **Хусаинову Салавату Сахиевичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Центральному избирательному округу №10 **Зайцеву Александру Валерьевичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Черниковскому избирательному округу №4 **Ахметшину Рустэму Закиевичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Шаймуратовскому избирательному округу №2 **Астахову Антону Олеговичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".

УҠЫТЫУСЫ ҠОЛАҒЫНА

# ПОРТФОЛИО КЕМГӘ КӘРӘК?




**Яңыраҡ бер районда командировкала булғайныҡ. VI класта уҡыған малайҙың 22 Маҡтау ҡағыҙы бар. Әле уҡыу йылының яртыһы ғына үткәнен иҫәпкә алһаҡ, йыл һайын уға кәмендә дүрт маҡтау ҡағыҙы бирелгән, тигән һүҙ.**

Үҙебеҙҙең заман менән сағыштырам да аптырабыраҡ ҡуям. Мин, мәҫәлән, тәүге маҡтау ҡағыҙын университетҡа уҡырға килгәс алдым. Ни ғәжәптер, беҙҙең мәктәптә ундай грамота биргәндәрен хәтерләмәйем. Әгәр бирелә ҡалһа, бер маҡтау ҡағыҙы булһа ла алыр инем, сөнки төшөп ҡалғандарҙан түгелмен дә.

Әле үҙем эшләгән "Йәншишмә" гәзите редакцияһы үткәргән әҙәби конкурстарҙа еңеүселәргә, элекке матур йола буйынса, яҙыусыларҙың автографлы китаптарын бүләккә әҙерләйбеҙ. Шул хаҡта ҡыуаныс уртаҡлашып, уҡытыусыларға хәбәр итһәк, уларҙан йыш ҡына шундай яуап ишетәбеҙ: "Зинһар, китап түгел, Маҡтау ҡағыҙы ебәрегеҙ. Беҙгә портфолио өсөн кәрәк. Китапты унда һалып булмай бит".

Ғәжәпләнерлек тә шул: мәктәпте тамамлаған йәш хәбәрселәр редакцияға ҡалын портфолио тотоп килә. Унда кәмендә 50-60 Маҡтау ҡағыҙы була. Ошо сама бүләктәрҙең ҡәҙере бармы икән, тип тә уйлап ҡуяһың ҡайһы саҡта. Уҡыусыһы ундай ҡағыҙ алған һайын уҡытыусының да абруйы күтәрелә икән. Хәҙер хатта ҡайһы бер уҡытыусылар уҡыусылары өсөн үҙҙәре шиғыр, мәҡәлә яҙып, редакцияға ебәрә башланы. Шиғырҙың аҫтында - баланың фамилияһы, шунан һуң - уҡытыусыһыныҡы. Компьютерҙа баҫып ебәргәс, уҡыусы яҙғанмы, әллә өлкән кешеме икәнен тәү ҡарауға белеп тә булмай.

Әммә әҙерәк уҡый башлаһаң, башланғыс класс балалары хатта ғилми эш кеүек мәҡәлә ебәргән булып сыға. Ундай тырышлыҡ кемгә кәрәк: үҙе яҙмаған балағамы, әллә уҡытыусыһығамы? Бала өсөн ижад итеп, уның уйлау, фекерләү ҡеүәһен үҫтереп буламы? Ошондайыраҡ юл менән алынған маҡтау ҡағыҙҙарынан йыйылған портфолионың әһәмиәте, ҡәҙере бармы? Бының менән балаларҙы маҡтауға табындырып, Маҡтау ҡағыҙҙарының бәҫен ебәреп, ҡағыҙ ҡолона әйләндермәйбеҙме? Төрлө сарала ҡатнашҡан балаларҙың барыһына ла бүләк биреү һәйбәттер һәм кәрәктер ҙә. Ә Маҡтау ҡағыҙҙары, дипломдар, сертификаттар һирәктәр өлөшөнә генә төшкән баһа булырға тейеш түгелме икән?

# АТАЙ НИҢӘ БАШЫН ЭЙҘЕ?



Хеҙмәттәшемдең II класта уҡып йөрөгән малайынан:

- Бөгөн ниндәй билдәләр алдың? - тип һораным.

- Биш! - тине. Атаһы улына ҡарап ғорурланып ҡуйҙы. Тик шул саҡ малай һүҙен дауам итеп:

- Тағы "ике" алдым, - тип өҫтәне.

Атаһы, сит кеше алдында улының был һүҙҙәренән уңайһыҙланып, башын түбән эйҙе.

- Белмәгән өсөн түгел бит, мин дәрескә һәйбәт әҙерләнгәйнем ул, һүҙлекте онотоп ҡалдырғанға ғына "ике" ҡуйҙы, - тине малай, аҡланғандай итеп.

Минең дә малайым шул мәктәптә уҡығайны. Берәй нәмәһен онотһа, уға ла шулай "ике" сәпәй торғайнылар. Шуны иҫкә төшөрөп:

- Улай дөрөҫ түгелдер ул, - тип фекеремде белдерҙем.
- Билдә белем өсөн ҡуйылырға, ә оноткан нәмә өсөн иҫкәртеү генә яһалырға тейеш түгелме икән?

Шул саҡ атай кеше улына талапсан ҡарап:

- Барыбер ул онотмаҫҡа тейеш ине, - тине лә башҡаса бер нәмә лә әйтмәне, башын эйгән килеш ултыра бирҙе.

...Ә шулай ҙа дәфтәрҙе онотоп өйҙә ҡалдырған өсөн шул фән буйынса "ике" ҡуйыу ғәҙел түгелдер, тип уйлайым. Ошолар хаҡында, бәлки, башҡаса уйлаусылар барҙыр. Бигерәк тә уҡытыусыларҙың фекерен ишетке килә.

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА.**

БЫЛ -ҠЫҘЫҠ

# НИСЕК БЕШӘ БИТ!

Икенсе икмәк тип йөрөтөлгән, барыһы ла яратып ашаған картуфҡа ваҡыты-ваҡыты менән ғәйеп ташлап ҡына торалар. Мәҫәлән, картуф ашау артыҡ ауырлыҡ йыйыуға, 2-се типтағы диабет үҫешенә булышлыҡ итә тигән фекер бар ине. Ғалимдар тикшеренеренеүҙәре быға мөһим бер деталь өҫтәгән. Эш картуфта ла түгел, ә уны нисек бешереүҙә. Тикшеренеүҙәрҙә 54 мең кеше ҡатнаша. Ҡыҙҙырылған, фри йәки пюре итеп ашалған картуф ысынлап та, диабетҡа килтереүе ихтимал икән. Ә бына һыуҙа бешкән картуфҡа бер ниндәй ҙә дәғүә юҡ. Киреһенсә, был йәшелсә туклыҡлы матдәләргә бай һәм дөрөҫ әҙерләгәндә сәләмәтлеккә лә, фигураға ла бер зыяны теймәй.



## 28 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия". [12+]
3.50 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**10.45, 14.45, 18.15 Выборы-2023. [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**11.45, 18.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Спортивная история. [12+]**
**12.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45, 4.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Т/с "Не игрушка". [12+]**
**16.15 Выборы-2023. Дебаты.**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Специальный репортаж. [12+]**
**19.00 "Башкорт аты-2023". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**20.30 Вечерний телецентр.**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Культурный фронт". [16+]**
**0.00 Х/ф "Поезд вне расписания". [12+]**
**1.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**2.00 Спектакль "Мою жену зовут Морис". [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 29 АВГУСТА ВТОРНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-2". [12+]
3.50 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45, 14.45, 18.15 Выборы-2023. [12+]**
**11.00 "Галерея изящных искусств". [12+]**
**11.30, 12.30, 17.30, 21.30, 22.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 18.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Т/с "Не игрушка". [12+]**
**16.15 Выборы-2023. Дебаты.**
**17.00, 6.00 "Дорога к храму". [6+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**19.00 "Башкорт аты-2023". [12+]**
**20.30 Вечерний телецентр.**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**23.45 "Курай даны". [12+]**
**0.00 Х/ф "Мелкий бес". [16+]**
**2.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**2.30 Спектакль "Озеро моей души". [12+]**
**4.15 История одного села. [12+]**
**4.30 Үткән гүмер. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 30 АВГУСТА СРЕДА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Дебаты.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-2". [12+]
3.50 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Әлләсе... [6+]**
**10.45, 14.45, 18.15 Выборы-2023. [12+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 18.00, 19.30, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.30 Новости спорта (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Т/с "Не игрушка". [12+]**
**16.15 Выборы-2023. Дебаты.**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**19.00 "Башкорт аты-2023". [12+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Вечерний телецентр.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00, 4.30 Автограф. [12+]**
**23.45 "Курай даны". [12+]**
**0.00 Х/ф "Американский дедушка". [16+]**
**1.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**2.00 Спектакль "Радость нашего дома". [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Тайм-аут. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 31 АВГУСТА ЧЕТВЕРГ

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Дебаты.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Наши. [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20, 22.21 Т/с "Спасская. Новые серии". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05 Т/с "Тайны следствия-2". [12+]
3.50 Т/с "Семейный детектив". [12+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45, 14.45, 18.15 Выборы-2023. [12+]**
**11.00 "Атайсал. Знай наших!" [6+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 18.00, 19.30, 20.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Т/с "Не игрушка". [12+]**
**16.15 Патриот РФ. [12+]**
**16.45 Криминальный спектр. [16+]**
**17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**19.00 Башкорттар. [6+]**
**19.45 Полезные новости. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Вечерний телецентр.**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Паспорт". [16+]**
**1.45 Новости (на баш. яз). [12+]**
**2.15 Спектакль "Шауракай". [12+]**
**4.15 Бәхетнамә. [12+]**
**5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 1 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Дебаты.
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Большой праздничный концерт, посвящённый Дню знаний из Государственного Кремлёвского Дворца.
23.40 Х/ф "Два билета домой". [18+]
1.25 Х/ф "Шанс". [12+]
4.37 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 17.30 "Йома". [6+]**
**10.30, 12.15, 19.45 История одного села. [12+]**
**10.45, 14.45, 18.15 Выборы-2023. [12+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 18.00, 20.15, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж. [16+]**
**12.45 Пофутболим? [12+]**
**13.00 "Автограф". [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Үткән гүмер. [12+]**
**14.15 "Курай даны". [12+]**
**15.00 "Гора новостей". [6+]**
**15.30 Т/с "Не игрушка". [12+]**
**16.45 Патриот РФ. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.00 "Честно говоря". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**22.00, 6.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Д/ф "Жемчужное ожерелье". [12+]**
**1.15 Спектакль "Индийская насмешница". [12+]**
**3.15 Новости (на баш. яз). [12+]**
**3.45 Үткән гүмер. [12+]**
**4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.00 Тормош. [12+]**
**5.30 "Бай". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 2 СЕНТЯБРЯ СУББОТА

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Фестиваль детской художественной гимнастики "Алина".
12.45 Т/с "Несломленная". [12+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Пустой дом". [12+]
0.40 Х/ф "Яркие краски осени". [12+]
4.05 Х/ф "Не говори мне "Прощай!" [12+]
5.47 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 Фестиваль детских и молодежных театральных коллективов "Театральное Поволжье". [6+]**
**8.45, 3.30 Башкирские каникулы. [12+]**
**9.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 Байтус. [6+]**
**10.45 Семәр. [6+]**
**11.00 Лит-ра. [6+]**
**11.30 МузКәрәҙ. [6+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.30 Хоккей. "Барыс" (Астана) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**19.00 "Байыҡ-2023". Гала-концерт детского телевизионного конкурса. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башкорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Спектакль "Не улетайте, журавли!". [12+]**
**1.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**2.15 Колесо времени. [12+]**
**3.15 История одного села. [12+]**
**4.15 Әлләсе... [6+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Мистический Башкортостан. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 3 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### РОССИЯ 1

6.10, 1.30 Х/ф "Портрет женщины в красном". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.30 Большие перемены. [6+]
12.35 Т/с "Несломленная". [12+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.15 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Курай даны". [12+]**
**9.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [6+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 М/с "Нурбостан". [6+]**
**10.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.00, 19.30 "Атайсал. Знай наших!" [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.30 "Дорога к храму". [6+]**
**16.00, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**16.30, 3.00 "Честно говоря". [12+]**
**17.15 Фестиваль детских и молодежных театральных коллективов "Театральное Поволжье". [16+]**
**18.45, 3.45 Х/ф "Внеклассный урок". [12+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**21.00, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 2.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Х/ф "В ночь лунного затмения". [12+]**
**0.15 Спектакль "Чужой ребенок". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**




Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Пушкинскому избирательному округу №6 Захаровой Айгуль Габдулловне на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Солнечному избирательному округу №9 Гиндуллину Фариту Хурматулловичу на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Солнечному избирательному округу №9 Салихову Валерию Мухаматнуровичу на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Сипайловскому избирательному округу №8 Рамазанову Ильдару Маратовичу на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".



Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Солнечному избирательному округу №9 Давлетшину Руслану Рамзитовичу на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".




Печатная площадь предоставлена безвозмездно избирательному объединению "Башкортостанское региональное отделение Всероссийской политической партии "ЕДИНАЯ РОССИЯ" на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".




Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Вазовскому избирательному округу №11 **Шагаповой Руфине Аликовне** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".




Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Центральному избирательному округу №10 **Мартову Игорю Олеговичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".




Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Шаймуратовскому избирательному округу №1 **Шабуневичу Андрею Владимировичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".




Печатная площадь предоставлена безвозмездно кандидату в депутаты Государственного Собрания - Курултая РБ седьмого созыва по Новиковскому избирательному округу №14 **Голубь Ивану Олеговичу** на основании ч.1 ст.65 Кодекса РБ "О выборах".

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Август айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Шишмә районынан** Олеся Ильясова, Әлфиә Ғилманшина, **Әлшәй районы** Яңы Сәпәш ауылынан Ира Шәрипова, **Белорет районы** Үткәл ауылынан Рәшиҙә Мөхәмәтғәлина, **Күгәрсен районы** Яҡшымбәт ауылынан Әлмирә Аллағыуатова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, оҙон ғүмер юлын бәхеткә сорналып, ҡыуаныс-шатлыҡтарға күмелеп, яҡындарығыҙҙың таянысын тойоп һәм изгелектәрен күреп үтергә насип итһен.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

АФАРИН!

# УРАЛ БАТЫР РУХЫ...

## тау булып күтәрелде, ҡая булып ҡалҡты

**(Башы 1-се биттә).**

Йомғаҡлау тантанаһы конкурста ҡатнашыусы нурлы, шат, дәртле балаларҙың сафтарға теҙелеп баҫып, ҡорҙо сәләмләүенән башланды. Нурлылар, сөнки улар "Урал батыр" эпосындағы аҡыл, белем, тәрбиәүи нәсихәттәрҙе йөрәктәре аша ла үткәргән. Йөрәктең ҡатнашлығы булмаһа, шул тиклем ҙур күләмдәге эпосты шартлатып яттан һөйләп бөтөп булыр инеме ни! Тел бәҫен белеүсе, рухыбыҙ һағында тороусы йәш ҡобайырсыларға рәхмәттән башҡа ни әйтәһең!

тәржемә итеүсе, ғилми яҡтан өйрәнеүсе, оҙаҡ йылдар "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурсының жюри составында эшләүсе Ғәйнислам Ибраһимовҡа арнап, уның исемендәге махсус премия ла булдырған. Әйткәндәй, премия был юлы Баймаҡ районы Темәс урта мәктәбе уҡыусыһы Розалия Ибраһимоваға тапшырылды.

Мәртәбәле конкурста ҡатнашып, яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән телһөйәр, илһөйәр уҡыусыларға республикабыҙ уҡыу йорттары, ваҡытлы матбуғат саралары, йәмәғәт ойошмалары тарафынан әҙерләнгән махсус призды Ишембай районы Маҡар урта мәктәбенән Искәндәр Һиҙиәтовтарға тапшырҙы.

Төрлө номинацияларҙа бүләкләнде балалар. Эпосты яңғыҙ башҡарыусылар ҙа, сәхнәләштерелгән тамашала күмәкләп башҡарыусылар ҙа - барыһы ла баһаланды, бүләкһеҙ ҡалманы. 1-се урын яулаусы Бөрйән районы Иҫке Собханғол урта мәктәбенең ижади коллективы **(1-се һүрәттә)**, Йылайыр районы Юлдыбай ауылының "Ләйсән" балалар баҡсаһы ижади коллективы һоҡландырҙы! "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ образы" номинацияһында Фатима Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы уҡыусыһы, Бөрйән сығышлы Наҙгөл Ғәбитоваға, "Иң яҡшы ир-ат образы" номинацияһында Бөрйән районының Иҫке Собханғол урта мәктәбе уҡыусыһы Илтимер Мырҙағоловҡа алҡышламаған кеше ҡалманы.

Ҡотлауҙар һуңында иһә 25-се юбилей конкурсының абсолют еңеүсеһенең исем-шәрифе яңғыраны. БР Мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Әлфиә Зәкир ҡыҙы Ғәлиева тылсымлы конвертты аса. Унда еңеүсе исеме - Республика инженер лицей-интернатының 10-сы класс уҡыусыһы Рәзинә Шахморатова! Ул йәш ҡобайырсы-сәсәндәр ҡорона үҙенең теләктәрен еткереп: "Был конкурста 1-се кластан ҡатнашам. "Урал батыр" эпосын ятлап, тарихи ҡомартҡыбыҙ йөкмәткеһен нығлап үҙләштерҙем, әйҙәгеҙ, ошо рухи мираҫыбыҙҙы һаҡлайыҡ һәм киләсәк быуынға еткерәйек", - тине һәм ҡурайҙа уйнап, үҙенең яратҡан өҙөгөн яттан һөйләп ишеттерҙе.



1



2

Артабан ололар берәм-берәм һүҙ алып, ошо балаларға маҡтау һәм хуплау һүҙҙәрен еткерҙе. Үткән йылдарҙағы еңеүселәр исеменән Өфө фән һәм технологиялар университетының башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты студенты , конкурстың 2018 йылғы еңеүсеһе Гөлсәсәк Шәрипова ҡотлау һәм фатиха һүҙҙәре менән сығыш яһаны. Бөрйән район хакимиәте башлығы урынбаҫары Венера Вәлиева конкурстың башланыу тарихы, бөрйәндәрҙең 27 йыл дауамында рухыбыҙҙы уятыр был сараның мәртәбәһен арттырыу өсөн һалған тырышлығы хаҡында матур тарих бәйән итте. Алып барыусылар был тарихҡа, Әхмәт Сөләймәнов, Гөлнар Юлдыбаева, Салауат Ғәлин, Ғәйнислам Ибраһимов, Артур Сурин, Әхмәт Дәүләтҡолов кеүек ғалимдарыбыҙ эпосыбыҙҙы һаҡлауға, киләсәк быуынға еткереүгә, йәш сәсәндәр мәктәбен тергеҙеүгә ҙур көс һалды, тигән мәғлүмәтте лә өҫтәне. Эйе, был арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең исем-шәрифтәре бындай тантаналарҙа яңғырамай ҡалырға тейеш түгел. Сөнки улар башлаған ғилми-тикшеренеү эштәре, ошо матур бәйге сирек быуаттан артыҡ дауам итә. Лайыҡлы дауам итеүселәр ҙә бар. Мәҫәлән, фольклорсы ғалимә Нәркәс Хөбөтдинованың был тантанала Бөтөн донъя башҡорттарының "Ал да нур сәс халҡыңа" миҙалы менән бүләкләнеүе ошоға раҫ. Ул атаһы Әхмәт Сөләймәновтың юлын дауам итеп, бөгөн М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында Башҡорт фольклоры үҙәгендә эшләй. Шулай уҡ туғандары "Урал батыр" эпосын төрөк теленә

здар бирелде. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Маҡтау ҡағыҙҙарына һәм бүләктәренә Ырымбур өлкәһе Төйлөгән районы Аллабирҙе урта мәктәбе уҡыусыһы Алтынай Ишбаева, Силәбе өлкәһе Сосновка районы Сируси урта мәктәбе уҡыусыһы Зарина Фәләховалар, "Киске Өфө" гәзите бүләктәренә - Сибай ҡалаһы Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге лицей уҡыусыһы Зөлфиә Яхина, Краснокама районы Яңы Бура урта мәктәбе уҡыусыһы Илзидә Закарина, Өфө ҡалаһының 147-се мәктәбе уҡыусыһы Аҫҡар Маликов, Өфө ҡалаһы М.Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы уҡысыһы Мәҙинә Хәбибуллина, Салауат ҡалаһының 25-се башҡорт гимназияһы уҡыусыһы Нургизә Әбделмәнова **(2-се һүрәттә)** лайыҡ булды. БР Мәғариф һәм фән министрлығының Милли мәғариф идаралығы етәксеһе Илдус Ҡаһарманов Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фондының махсус призларын Йылайыр районының Исҡужа башланғыс мәктәп-баҡса тәрбиәләнеүсеһе Йәмилә Яманғоловаға, Бөрйән районынан Айназ Ғиззәтуллинға, Ишембай районы Маҡар урта

Эйе, Урал батыр тирә-йүнгә Йәншишмә һыуын тағы һиптеме ни - өс көн дауамында Бөрйән ере йәш ҡобайырсы-сәсәндәрҙең рухлы, сәмле сығышына шаһит булды, эпостар төбәге булған изге еребеҙҙә, тәүтөйәгебеҙҙә боронғолоҡтоң үҙе яңғыраны, башҡорт рухы тау булып күтәрелде, ҡая булып ҡалҡты, Ағиҙелгә ҡушылып моңайҙы, августың ҡайнар ҡояшынан уҙҙырып, күңелдәрҙе йылытты, киләсәгебеҙҙең рухлы, ышаныслы ҡулдарҙа икәненә төшөндөрҙө...

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**
**Бөрйән районы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# НАМЫҪЛЫ БУЛҺАҢ...

## намыҫһыҙ менән буталма

Наҙан, мин еңдем, тиер; белемле, юл бирҙем, тиер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әгәр ҙә ылыҡтырғыс нәмәләргә ҡаршы тора алмаясағымды аңлаһам, мин тиҙерәк улар янынан ҡасыу яғын ҡарайым.

**(Мэй Уэст).**

Аҡыл өсөн рәхмәттән дә яҡшыраҡ күнекмә юҡ. Рәхмәт белдереүҙән кеше шундай эске ҡәнәғәтләнеү ала һәм һинең бар теләктәреңдә үтәп тә ҡуя.

**(Джозеф Аддисон).**

Көтөп ала белгәндәргә барыһы ла килә.

**(Бенджамин Дизраэли).**

Был хат шул тиклем оҙон, сөнки уны ҡыҫҡараҡ итеп яҙырға ваҡытым булманы.

**(Блез Паскаль).**

Компетентлыҡ - ул лидерҙың нимә кәрәк, шуны аңлатып бирә белеүен, нимә кәрәк, шуны планлаштыра алыуын, нимә кәрәк, шуны эшләй алыуын аңлата.

**(Джон Максвелл).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше ғүмере аҙағында бик ныҡ бөлөп, фәҡирләнеп, мохтажлыҡта ғүмер иткән. Уның мосолман йолаһы буйынса ҡорбан салырлыҡ бер баш малы ла ҡалмаған. Фәҡирлеге арҡаһында ул дини йолаларҙың береһен дә үтәй алмай көн иткән.**

**Бер саҡ уның эргәһенә ауыл муллаһы килгән һәм нәсихәт уҡый башлаған. "Ни өсөн һин дини йолаларҙы үтәмәйһең?- тигән ул фәҡиргә. - Әгәр ҙә һинең ҡорбан итеп салырға малың юҡ икән, күршеләреңдән алып тор, моғайын, улар баш тартмаҫ. Унан һуң, һинең бит туған-тыумасаларың бик ишле, ниңә һин уларҙан алып тормайһың ҡорбан өсөн малды? Әгәр ҙә күршеләреңдән һорап торғоң йә туғандарыңдан талап иткең килмәй икән, кемдәндер бурысҡа алып тор..."**

**Фәҡир муллаға бер аҙ ҡарап тора ла, шулай ти: "Юҡ, ҡартайған көнөмдә хәйер һораусы булғым килмәй, мин берәүҙән дә бер ниҙе лә бурысҡа алмаясаҡмын. Туғандарымдан байлыҡтарын минең менән бүлешеүҙе лә талап итә алмайым, улайһа мин талаусыға әйләнәм бит. Унан һуң, түләй алмаҫымды белә-тороп, мин нисек бурысҡа алырға тейешмен әле ул малды? Юҡ инде, әгәр ҙә миңә бурыслы булып үлергә яҙған икән, Алла алдында ғына бурыслы буласаҡмын..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 23033

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән ВӘЛИЕВА,
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
25 август 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2700
Заказ - 1157